ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22-28 август (урағай) 2025

№33 (1177)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ниңә ауылыңды ташлайһың?**

Ҡыуҙар, етештер, һат!



4-5

**Үлемдән оят көслө,**

йәки, Әрмеләге ваҡиғаларҙан



6

**Ҡоллоҡҡа төшә күрмәгеҙ!**



8-9

**Ҡорот байрамы - Хәйбуллала**



11

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Үҙең йәшәгән заманға зарланыу, властағыларҙы тәнҡитләү, үткәндәрҙе һағынып илау, киләсәккә тормошҡа ашмаҫтай хыялдар бағлау - был беҙ түгелме?***

***(Э. Берк).***

*КӨН ТЕМАҺЫ*

# УҠЫТЫУСЫЛАР...

## яңы уҡыу йылына әҙерләнә

**19 августа Өфө ҡалаһы уҡытыусыларының август кәңәшмәһе үтте. Сарала Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова, Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Искәндәр Әхмәтвәлиев, республика мәғариф министрының беренсе урынбаҫары Светлана Антипина, Өфө ҡала Советы рәйесе Марат Вәсимов, баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиев, мәғариф ойошмалары етәкселәре, педагогтар, мәғариф ветерандары ҡатнашты.**



Быйылғы август кәңәшмәһенә сығарылған мәсьәләләр муниципаль мәғариф системаһын үҫтереү, берҙәм һөнәри йүнәлеш моделен тормошҡа ашырыу, хеҙмәт баҙарында уҡыусыларға һәм студенттарға дөрөҫ юл күрһәтеү, һөнәри үҫеш перспективалары мәсьәләләренә, мәктәптәрҙә отчеттарҙы ҡыҫҡартыу һәм хәүефһеҙ мәғлүмәт системаларын үҫтереү өлкәләренә ҡағылды.

- Мәскәүҙә үткән төбәк мәғариф министрҙарының Бөтә Рәсәй кәңәшмәһендә мәғариф системаһын үҫтереүгә йомғаҡ яһалды. Шуныһы ҡыуаныслы, Башҡортостан иң яҡшылар иҫәбендә билдәләнде. Әлбиттә, был уртаҡ уңышта Өфө ҡалаһының мәғариф системаһы ҙур урын тота. Ошо дөйөм еңеү менән ҡотлайым. Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенко, Федерация Советының фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты исеменән сәләмләү һүҙҙәрен еткерәм, барыбыҙға ла уңышлы эш теләйем, - тине үҙенең сығышында Лилиә Ғүмәрова.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ТҮЛӘҮЛЕ ОТПУСК



**Рәсәй Социаль фондының республика бүлексәһе эшләп йөрөгән әсәйҙәргә, ҡайһы бер осраҡтарҙа атайҙарға ла баланы йәш ярымға тиклем ҡарау буйынса пособие түләй.**

Фондтан хәбәр итеүҙәренсә, 2025 йылда республикала 31 меңдән ашыу кеше "декрет" пособиеһын ала. Әсәйҙәр генә түгел, ә рәсми эше булған башҡа туғандары ла (атай, олатайөләсәй йәки опекундар) аҡсалата түләүгә хоҡуҡлы. Был пособие ата-әсәнең һуңғы ике йылдағы уртаса эш хаҡының 40 проценты күләмендә иҫәпләнә. Пособие күләме айына 69 мең һумға етеүе ихтимал. Декрет ялынан иртәрәк сыҡҡан осраҡта ла пособиеға хоҡуҡ һаҡлана. Быйыл баланы йәш ярымға тиклем ҡарау буйынса түләүҙәргә йәмғеһе 2,6 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлтелгән. Хәбәр ителеүенсә, йыл башынан Башҡортостандан 4,3 мең ауырлы ҡатын-ҡыҙға берҙәм пособие тәғәйенләнгән.

## БЕРҘӘМ ДӘРЕСЛЕКТӘР...




**Башҡортостан мәктәптәрендә 6-8-се кластар өсөн йәмғиәтте өйрәнеү дәрестәре туктатыла. Ҡарар федераль кимәлдә ҡабул ителгән.**

"Ысынлап та, әйткәнебеҙсә, киләһе йылдан йәмғиәтте өйрәнеү фәне 9-сы кластан уҡытыла башлай, ә ҡалған ваҡыт илебеҙ тарихын өйрәнеүгә бүленә", - тине Рәсәйҙең мәғариф министры Сергей Кравцов ил Хөкүмәтендә 2024-2025 уҡыу йылы йомғаҡтарына арналған брифингта. Министр һүҙҙәренсә, дәүләт дәреслектәрен әҙерләү башланған, 5-9-сы кластар өсөн тарих буйынса берҙәм дәреслектәр, шулай уҡ 9-11-се кластар өсөн йәмғиәтте өйрәнеү дәреслектәре өҫтөндә эш тамамланған. Хәбәр иткәнебеҙсә, йәмғиәтте өйрәнеү фәне 2026 йылдың 1 сентябренә тиклем 8-се класс программаларында ҡала, Мәғариф министрлығының бойороғо хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған.

*КЕМ АЛЫҠ!*

# ИҢ ШӘП БҮЛӘК - КИТАП!

**Быйылғы йылдың икенсе яртыһында ла "Киске Өфө" гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы, уҡымышлы, вайымлы уҡыусыларыбыҙға рәхмәтлебеҙ. "Аңлы уҡыусы" тип атауыбыҙ юҡҡа түгел, сөнки хәҙер гәзит-журнал-китап уҡыусылар тамам һирәгәйҙе. Күрәһең, аҡ ҡағыҙ битендәге һүҙҙе һанлаусы, уның әһәмиәтен баһалаусы аңлылар сафы һирәгәйә бара. Ә шулай ҙа бындай статустағы уҡыусыларыбыҙҙы юғалтып бөтмәгәнбеҙ әле. Бар әле гәзит һүҙен үҙ иткәндәр, "Гәзиттә бит шулай яҙылған!" тип, һәр һүҙен гәзит һүҙе менән йөпләүселәр - улар беҙҙә ҡағыҙ баҫмаларҙың киләсәктә лә йәшәйәсәгенә өмөт уята. Ә беҙ был өмөттөң аҡланыуынан дәртләнеп, уҡыусыларыбыҙҙы рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, йөкмәткеле яҙмаларыбыҙ менән танһыҡтарын ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ.**

**(Дауамы 3-сө биттә).**

12+

ҠЫҪҠАСА

# СИБАЙҘА - ҺАБАНТУЙ!

**4-6 сентябрҙә Сибайҙа инвестиция һабантуйы үтә. Форумдың девизы - "INNOREGION: иҡтисади үҫештең яңы үҙәктәре".** 5 сентябрҙә агросәнәғәт комплексы өлкәһендә Башҡортостан - Белоруссия хеҙмәттәшлеге перспективаларына, Рәсәй - Төркиә тышҡы сауҙа бәйләнештәрен үҫтереүгә һәм экспорт һәм импорт, ҡатын-ҡыҙҙар бизнесы, экспортерҙар клубы һәм башҡалар өсөн яңы үҫеш нөктәләрен эҙләүгә арналған биш тематик майҙансыҡ эшләйәсәк. Шул уҡ көндө Башҡортостан Хөкүмәтенең күсмә ултырышы үтә. "Иҡтисади үҫештең яңы үҙәктәре" пленар сессияла форумға йомғаҡ яһаласаҡ һәм үҫештең перспективалы йүнәлештәре билдәләнәсәк. 6 сентябрҙә Баймаҡ районының Граф күле буйында "Башҡорт аты" халыҡ-ара ат спорты һәм башҡорт мәҙәниәте фестивале була.

✓ **Башҡортостан ирекмәндәре Луганск госпиталдәрендә эш башланы. Был ирекмәндәрҙең "Беренсе тирмә" төркөмө составында 20-се тапҡыр барыуы, тип яҙҙы Башҡортостан Башлығы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.** "Луганск Халыҡ Республикаһында улар яралыларҙы ҡарай, ашата-эсерә, процедураларға йөрөтә, бүлексәләрҙә дежурҙа тора. Смена ике аҙна дауам итә. Күптәр яугирҙар янына бер тапҡыр барыу менән генә сикләнмәй, йәнә килә", - тип яҙҙы Радий Хәбиров. "Беренсе тирмә" проекты былтыр ноябрҙә эшләй башланы, тип иҫкә төшөрҙө ул. Ошо ваҡыт эсендә унда 32 районд ан 146 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашты. Уларҙың күбеһенең яҡындары МХО биләмәһендә хәрби бурысын үтәй. 20-се смена составында - Ауырғазы, Ҡырмыҫҡалы, Шишмә, Шаран районд арынан 7 ҡатын-ҡыҙ.

✓ **Өфөлә йыл һайын ойошторолған "Һөт иле" ғаилә фестивале 30 августа була. 2011 йылдан башлап фестиваль ҡунаҡсыллыҡ, һөт һәм һөт ризыҡтарына һөйөү символына әүерелде.** Мәҫәлән, былтыр һөт фестивалендә 100 меңдән ашыу кеше ҡатнашты. Быйыл да ойоштороусылар бай программа әҙерләй. "Һөт иле"ндә төп яңылыҡ - башҡорттарҙың милли эсемлегенә, уның тарихына һәм шифалы үҙенсәлектәренә арналған "КымыҙФест" майҙансығы. Башҡортостандың иң яҡшы ҡымыҙ бешеүселәре Өфөгә бер тонна файҙалы эсемлек килтерә, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың ауыл хужалығы министрлығынан. Башҡа ауыл хужалығы продукцияһы етештереүселәр ҙә үҙ майҙансыҡтарын тәҡдим итә. Фестивалде уҙғарыу урыны - "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркы.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ИҢ ЯҠШЫЛАРЫ ТИП ТАНЫЛДЫ



**Сколково майҙансығында үткән "Пилотһыҙ системалар: киләсәк технологиялары" беренсе халыҡ-ара форумында Башҡортостанда етештерелгән БПЛА һәм двигателдәрҙе күрһәттеләр. Был сарала илдең 76 төбәге вәкилдәре ҡатнашты, тип яҙҙы республика етәксеһе социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.**

"Уфимец" компанияһы - Башҡортостан пилотһыҙ авиация системаһы ғилми-етештереү үҙәгенең төп резиденты. Компания төбәк стендында үҙ продукцияһы өлгөләрен - "Уфимец-150" пилотһыҙ авиация системаһын, fpv-дронын, 6 модификациялы электр двигателдәрен тәҡдим итте. Хәтерегеҙгә төшөрәм, тап ошо етештереүсенең дрондарын МХО биләмәһенә ебәрәбеҙ, яугирҙар уларҙы бик маҡтай. Сколковола "Уфимец" двигателдәре лә үҙҙәрен яҡшы күрһәтте. Инженер-спорт ярыштарында улар бер юлы бер нисә номинацияла иң яҡшыһы тип танылды", - тип ургаҡлашты Хәбиров.

Республика командаһы шулай уҡ Рәсәй субъекттарының берҙәм рейтингында Гран-приға лайыҡ булды һәм "Традицияларға алмашҡа БАС" сценарийҙарын әҙерләү буйынса эшләкле уйында еңеү яуланы, тип өҫтәне республика етәксеһе.

"Аврора" таланттарҙы үҫтереү үҙәгендә шөғөлләнеүселәр һәм Өфө радиоэлектроника колледжы студенттары яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтте. Улар үҙ номинацияларында, шул иҫәптән криптографик саралар ярҙамында пилотһыҙ аппараттарҙы һаҡлау буйынса ярыштарҙа лидер алдынғылыҡты бирмәне. БПЛА-лар төрлө өлкәләрҙә лә, тыныс тормошта ла кәрәк. Башҡортостан илебеҙҙә пилотһыҙ авиацияны үҫтереү үҙәктәренең береһенә әүерелергә мөмкин", - тип билдәләне Хәбиров.

# УЛАР - БЕҘҘӘ, БЕҘ - УЛАРҘА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Беларусь менән берлектә мәктәп туризмы программаһы булдырыу хаҡында һөйләне. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, "Берҙәмлек көсө" профилле сменаһы - ошо йүнәлештәге тәүге ҡарлуғастарҙың береһе.**

"Был көндәрҙә Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик паркында ата-әсәләре Минск автомобиль заводында эшләгән 20 уҡыусы ял итә. Тарихыбыҙ, йолаларыбыҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ, аш-һыуыбыҙ менән таныша, иҫтәлекле урындарға бара, илһөйәрлек сараларында ҡатнаша. Улар беҙҙең ҡунаҡсыл республикабыҙ тураһында яҡшы тәьҫораттар менән ҡайтыр тип ышанам. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостандан 20 уҡыусы Белоруссияға китте. Улар араһында - олимпиада, конкурс, конференция призерҙары һәм еңеүселәре, йәштәр хәрәкәттәре активистары. Улар Минск автомобиль заводы ҡарамағындағы балалар лагерында ял итә. Бай программа әҙерләнгән, шул иҫәптән автозаводҡа, "Хатынь", "Дан ҡурғаны", "Сталин линияһы" мемориаль комплекстарына, Бөйөк Ватан һуғышы тарихы музейына һәм башҡа бик күп объекттарға барыу ҡаралған", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, Белоруссияла тарихҡа ихтирам менән ҡарайҙар, һуғыш осоро ваҡиғалары һәм геройҙары тураһында хәтерҙе һаҡлайҙар. "Ошо илгә барып ҡайтыуҙы мин патриотик тәрбиә биреүҙең мөһим өлөшө тип иҫәпләйем. Әлеге башланғыс өсөн Рәсәйҙең Белоруссиялағы сауҙа вәкиллеге ҡарамағындағы Башҡортостан вәкиле Константин Климинға, Минск автомобиль заводының генераль директоры Валерий Иванковичҡа һәм үҙебеҙҙең Мәғариф министрлығына рәхмәт белдерәм", - тип йомғаҡ яһаны Хәбиров.

# ЯУАПЛЫЛЫҠ НИСӘ ЙӘШТӘН?

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы закон сығарыусылары төбәктең хоҡуҡ һаҡлау органдары тәҡдимдәре нигеҙендә Енәйәт кодексына төҙәтмәләр индерергә һәм наркотиктарҙың законһыҙ әйләнеше өсөн енәйәт яуаплылығы йәшен 16 йәштән 14 йәшкә тиклем кәметергә тәҡдим итә.**

Проектҡа аңлатма яҙыуында әйтелгәнсә, былтыр республикала наркотиктар әйләнеше өлкәһендә бәлиғ булмағандар ҡылған енәйәттәрҙең дөйөм һаны биш тапҡырға - 23-тән 151-гә тиклем артҡан. Ҡулға алынған 42 наркокурьерҙың 12-һе - мәктәп уҡыусылары, 17-һе - урта махсус уҡыу йорттары студенттары, береһе - юғары уҡыу йорто студенты һәм 12 үҫмер, улар уҡымай ҙа, эшләмәй ҙә. Үҫмерҙәр йыш ҡына курьерҙар, "наркотик һатыусылар" ролендә сығыш яһай. Әйткәндәй, улар үҙҙәре наркотик матдәләр ҡулланмай. Енәйәт юлына аҡса эшләү өсөн баралар һәм, ҡағиҙә буларак, был бер тапҡыр ғына ҡабатланмай. 16 йәшкә тиклемге үҫмерҙәрҙе енәйәт ойоштороусылар әүҙем ҡуллана, шуға күрә енәйәт яуаплылығына тарттырыу йәшен 14 йәшкә тиклем кәметеү енәйәтселекте иҫкәртеүҙең һөҙөмтәле сараһы булып тора ала, тип аңлата депутаттар.

Билдәле булыуынса, наркотик матдәләрҙе, психотроп матдәләрҙе йәки уларҙың аналогтарын законһыҙ һатып алыу, һаҡлау, ташыу, етештереү, эшкәртеү өсөн енәйәт яуаплылығы ҡарала. Был енәйәттәр өсөн төрлө язалар бар, шул иҫәптән штрафтар, холоҡ төҙәтеү эштәре, азатлыҡты сикләү һәм енәйәттең ауырлығына ҡарап, төрлө сроктарға иркенән мәхрүм итеү.

# ҠЫМЫҘ - ФАЙҘАЛЫ ЭСЕМЛЕК

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа ни өсөн ҡымыҙ һәм квас энергетиктарға ҡарамауын аңлаттылар.**

Төбәк парламенты спикеры Константин Толкачев һүҙҙәренсә, традицион тәбиғи эсемлектәр алкоголһеҙ тонуста тотоусы (тонизирующие напитки) эсемлектәр билдәләмәһенә инмәй. Рәсәй Федерацияһының ГОСТ р 52844-2007 милли стандартына ярашлы, ундай эсемлектәрҙә кофеин һәм (йәки) үҫемлек экстракттары (гуаран, матэ, женьшень, лимонник, элеутерококк) булырға тейеш. Өҫтәүенә, кофеин миҡдары 0,151 мг/см³ һәм 0,4 мг/см³ артыҡ булырға тейеш түгел. Кеүәҫтә һәм ҡымыҙҙа был ингредиенттар булмағанлыҡтан, уларҙы энергетиктар иҫәбенә индерергә ярамай. Тимәк, уларға Башҡортостанда индерелгән һатып алыусыларҙың һатыу урындары һәм йәш цензы буйынса сикләүҙәр ҡағылмай.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Башлығы алкоголһеҙ энергетиктар һатыуҙы тыйыу тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы. Уны БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тәҡдим итте һәм ҡабул итте. Яңылыҡтар 2025 йылдың 1 сентябренән көсөнә инә. Закон мәктәптәр, университеттар, уҡыу һәм дауалау учреждениелары, театрҙар һәм физик культура һәм спорт учреждениелары эргәһендә урынлашҡан сауҙа нөктәләрендә алкоголһеҙ тонус эсемлектәрен, шул иҫәптән энергетик эсемлектәрҙе һатыуҙы тулыһынса тыйыуҙы күҙ уңында тота. Ул республика халҡының әхлағын, һаулығын, хоҡуҡтарын һәм законлы мәнфәғәттәрен һаҡлауға йүнәлтелгән, тиелә документта.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Мәскәүҙә Мәғариф буйынса Бөтә Рәсәй кәңәшмәһендә мәғариф өлкәһендә тотороҡло юғары эш һөҙөмтәләре өсөн РФ субъекттарының башҡарма органдары һәм Рәсәй Мәғариф министрлығы ҡарамағындағы ойошмалар етәкселәре, шул иҫәптән Башҡортостан Республикаһының мәғариф министры Илдар Мәүлетбирҙин РФ Мәғариф министрлығының почет грамотаһы менән бүләкләнде. Наградаларҙы вице-премьер Дмитрий Чернышенко һәм мәғариф министрлығы башлығы Сергей Кравцов тапшырҙы.

✓ Быйыл Рәсәйҙә беренсе класҡа 1,5 миллион самаһы уҡыусы бара. "1 сентябрҙә бөтә ил буйынса 40 мең мәктәп 18 миллиондан ашыу балаға үҙ ишектәрен аса. 28 субъектта 43 яңы мәктәп асыласаҡ", - тип белдерҙе төбәктәрҙең мәғариф ведомстволары етәкселәре менән Бөтә Рәсәй кәңәшмәһендә вице-премьер Дмитрий Чернышенко. Республиканың Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 1 сентябрҙә Башҡортостанда 45 мең самаһы беренсе класс уҡыусыһы мәктәпкә бара, республикала бөтәһе 500 меңдән ашыу уҡыусы яңы уҡыу йылын башлай.

✓ Ишембайҙа һәм Салауатта Ҡала көнөн билдәләүҙән баш тарттылар. Салауат ҡалаһы башлығы Марат Заһиҙуллин хәбәр итеүенсә, байрамды август айында, Нефть һәм газ сәнәғәте хеҙмәткәрҙәре көнө менән бергә билдәләйҙәр ине, быйыл иһә "беҙҙең иғтибарға һәм ярҙамға мохтаж башҡа йүнәлештәр бар". Ишембай районы хакимиәтендә лә шундай белдереү менән сығыш яһанылар. Быға тиклем Ҡала көнөн улар август айының һуңғы шәмбеһендә билдәләгән. Әммә илебеҙ өсөн ҡатмарлы осорҙа бындай байрамдар урынһыҙ, тигән фекерҙә улар. Шуға күрә байрам өсөн тотонолорға тейешле аҡса МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеүгә йүнәлтелә, тиелә рәсми хәбәрҙә. Әйткәндәй, быйыл Стәрлетамаҡта ла Ҡала көнө үткәрелмәй.

✓ Көйөргәҙе районында яңы етәксе тәғәйенләнде. Лира Тереғолова - етенсе ҡатын-ҡыҙ муниципалитет башлығы. Көйөргәҙе районы советы депутаттары бер тауыштан Лира Тереғолованы муниципалитет хакимиәте башлығы итеп һайланы. Был хаҡта район хакимиәтенең социаль селтәрҙәрендә хәбәр ителә. Лира Тереғолова быға тиклем хакимиәт башлығының социаль сәйәсәт буйынса урынбаҫары ине. Ул республикала муниципалитет етәксеһе итеп тәғәйенләнгән етенсе ҡатын-ҡыҙ булды.

✓ Стәрлетамаҡ заводында зыян күргән эшселәрҙең хәле билдәле булды. Пациенттарҙың бер өлөшө - стационарҙа, башҡалары өй шарттарында дауалана. "БСК" предприятиеһында теркәлгән ғәҙәттән тыш хәл ваҡытында зыян күргән өс пациент - үтә ауыр, тағы ла һигеҙ кеше ауыр хәлдә ята. Ә 21 эшсенең хәле уртаса ауырлыҡта тип баһалана, берәүһе еңелсә йәрәхәттәр алған. Был хаҡта Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр.

✓ ***2024 йылда "Өфө ҡалаһының Почетлы педагогы" исеме булдырылды һәм уға Уҡытыусылар көнөн билдәләү айҡанлы тәүге 16 педагог лайыҡ булды.***



*КЕМ АЛЫҠ!*

# ИҢ ШӘП БҮЛӘК - КИТАП!




**(Башы 1-се биттә).**

**Шулай итеп, быйылғы йылдың икенсе яртыһында "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан түбәндәге уҡыусыларыбыҙ ошо матур китаптарға лайыҡ булды.**

**Мәләүез районы** Хәсән ауылынан Г. Йәғәфәрова, **Салауат районы** Тирмән ауылынан Фәүзиә Шакирова, **Архангел районы** Тәүәкәс ауылынан Г. Хыҙырова - ***Рим Ахмедов "Одолень-трава";***

**Салауат районы** Ишимбай ауылынан Альмира Хизбуллина, **Мәләүез ҡалаһынан** Сәйфулла Әмиров - ***Спартак Ильясов "Ҡағанат вариҫтары";***

**Баймаҡ районы** Урғаҙа ауылынан Фәниә Әминева, **Салауат районы** Әлкә ауылынан Ләлә Кәримова, **Учалы районы** Иҫке Байрамғол ауылынан Дилә Сәйфетдинова - ***Һәҙиә Дәүләтшина "Ырғыҙ";***

**Салауат районы** Яңы Ҡаратаулы ауылынан Гөлнур Бәширова, **Хәйбулла районы** Уфимский ҡасабаһынан Ғилминур Таҡалова, **Баймаҡ районы** Йәрмөхәмәт ауылынан Зөлфиә Мөкминова, **Өфө ҡалаһынан** Сажидә Ишмөхәмәтова - ***"Башҡорт халыҡ ижады";***

**Архангел районы** Убалар ауылынан Альмира Юламанова, **Нефтекама ҡалаһынан** Т. Карманова - ***Таңсулпан Ғарипова "Әҫәрҙәр";***

**Баймаҡ районы** Ғүмәр ауылынан Зөбәйҙә Үҙәнбаева, **Учалы районы** Бөйҙә ауылынан З. Әсфәндийәрова, **Әбйәлил районы** Аслай ауылынан Фәниә Мансурова - ***Сабир Шәрипов "һайланма әҫәрҙәр";***

**Сибай ҡалаһынан** Хәлил Һөйөндөков, **Күгәрсен районы** 2-се Төкәт ауылынан Рәшит Байғөбәков, **Учалы районы** Уральск ҡасабаһынан Булат Шаһивәлиев - ***Ғәлим Хисамов "Шаҡай бураны";***

**Күгәрсен районы** Үрге Сирбай ауылынан Азат Фәхретдинов, **Хәйбулла районы** Түбәнге Смаҡ ауылынан Ханнан Мөхәмәтйәров - ***Яңыбай Хамматов "Тыуған көн";***

**Иглин районы** Иглин ауылынан Р. Игеҙбаева, **Ишембай районы** Байғужа ауылынан Хәсән Васильев - ***"Салауат Юлаев";***

**Әлшәй районы** Ҡармыш ауылынан Минийән Ғәбделмәнов, **Баймаҡ районы** 2-се Этҡол ауылынан Көнһылыу Сөләймәнова, **Күгәрсен районы** Сәйетҡол ауылынан Миникамал Ғәйнуллина - ***Мәрйәм Бураҡаева "Әҫәрҙәр";***

**Ишембай ҡалаһынан** Рафаэль Мөхәмәтов, **Баймаҡ районы** Үрге Йәйыҡбай ауылынан Зөлхәбирә Мырҙағәлина - ***Рәми Ғарипов "Минең антологиям";***

**Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Альберт Үҙбәков, **Баймаҡ районы** 1-се Этҡол ауылынан Булат Азаматов, **Белорет ҡалаһынан** Зөбәржәт Суфиянова - ***Мирас Иҙелбаев "Иҙел йорт";***

**Баймаҡ районы** Темәс ауылынан Фәрит Йосопов, **Әбйәлил районы** Асҡар ауылынан Самат Хәйруллин, **Йылайыр районы** Мәҡсүт ауылынан Фирҙәүес Мостафина, **Миәкә районы** Тамьян-Таймаҫ ауылынан Флүзә Солтанова - ***Рәлис Ураҙғолов "һуңғы йәйләү";***

**Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Тәнзилә Абдуллина, **Стәрлетамаҡ районы** Отрадовка ауылынан Римма Нуриева, **Ейәнсура районы** Кинйәбулат ауылынан Марат Маликов - ***Рәсүл Байгилдин "һай, түрәкәйгенәһе";***

**Баймаҡ районы** Ишмырҙа ауылынан Радик Солтанғолов, **Нефтекама ҡалаһынан** Рәмзилә Аҡмалова, **Белорет районы** Инйәр ауылынан Әлиә Саматова - ***Фәнил Бүләков "Йәнемдең ҡанаттары";***

**Дыуан районы** Иҫке Хәлил ауылынан Рәшиҙә Ғәйнуллина, **Күгәрсен районы** Сәйетҡол ауылынан Нурия Нияҙғолова, **Межгорье ҡалаһынан** Шәүрә Яҡупова, **Миәкә районы** Тамьян-Таймаҫ ауылынан Клара Ғатина, **Өфө районы** Рус Юрмашы ауылынан Хәмит Вәлиев, **Ейәнсура районы** Бикбау ауылынан Ләлә Түләгәнова, **Көйөргәҙе районы** Көйөргәҙе ауылы Йәмил Чурин, **Ишембай районы** Һайран ауылынан Риф Хәсәнов, **Баймаҡ районы** Әхмәр ауылынан Рәмил Мәтинов, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Мәғәзирә Иҫәндәүләтова - ***"2026 йылға дини календарь";***

**Шулай итеп,** был акциябыҙ киләһе 2026 йыл миҙгеле өсөн гәзитебеҙгә яҙылыу барышында ла үҙ көсөндә икәнен белеп ҡуйығыҙ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош теләндәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ. Шулай уҡ квитанцияларығыҙҙа адрестар тулы (индекс мотлаҡ кәрәк), аңлайышлы итеп тултырылһын ине, тигән теләк тә бар.

**Иҫкәрмә.** Бүләкләнеүселәр китаптарҙы үҙҙәренең почтальондары аша алыр. Кемдәргә китаптар барып етмәгән, улар Өфөләге балалары, туғандары, таныштары аша Революцион урамы, 167/1 адресы буйынса урынлашҡан редакциябыҙҙан алдыра ала.

● **Беҙҙең сайт:** www.kiskeufa.ru. **Беҙҙең электрон почта:** kiskeufa@mail.ru.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*КӨН ТЕМАҺЫ*

# УҠЫТЫУСЫЛАР...

## яңы уҡыу йылына әҙерләнә

**(Башы 1-се биттә).**

Кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға мөрәжәғәт итеп, Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев баш ҡала уҡытыусыларына изге хеҙмәте һәм профессиональ бурыстарына тоғролоғо өсөн рәхмәт белдерҙе.

- Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығын билдәләгәндә, Рәсәйҙә иғлан ителгән Ватанды һаҡлаусылар һәм Башҡортостанда барған Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам итеү йылында үҫеп килгән быуынды патриотик тәрбиәләүҙә хеҙмәтегеҙҙең әһәмиәтен айырыуса билдәләргә теләйем, - тине ул сығышының башында.

2024 йылда "Өфө ҡалаһының Почетлы педагогы" исеме булдырылды һәм уға Уҡытыусылар көнөн билдәләү айҡанлы тәүге 16 педагог лайыҡ булды. Ошоға бәйле, исемгә ҡушып бирелгән аҡсалата дәртләндереүҙең күләмен 60 мең һумға тиклем арттырыу тураһында тәҡдим ҡарала, тип билдәләне ҡала етәксеһе.

Баш ҡалала "Белемгә юл" проекты сиктәрендә мәктәптәргә һәм балалар баҡсаларына илткән тротуарҙар һәм инеү урындары тәртипкә килтерелә. Белем биреү ойошмаларын төҙөү һәм реконструкциялау дауам итә. Федераль программа сиктәрендә мәктәптәргә ҙур капиталь ремонт үткәрелә. Алдағы уҡыу йылында өҫтәмә белем биреү системаһының мөмкинлектәре киңәйә. Мәҫәлән, Дим районындағы "Росток" фән, инновациялар һәм ижад үҙәге һәм Октябрь районындағы "Калейдоскоп" балалар ижады үҙәге базаһында яңы майҙансыҡтар асыласаҡ.

- Беҙҙең төп бурыс - Рәсәйҙең социаль-иҡтисади үҫеш талаптарына яуап биргән белем биреү сифатын тәьмин итеү өсөн шарттар булдырыу, - тине ҡала мәғариф идаралығы начальнигы Азат Батыршин, 2024-2025 уҡыу йылындағы эш йомғаҡтары һәм алдағы осорға төп бурыстар тураһында доклад яһап.

Пленар ултырыш йомғаҡтары буйынса бөтә тәҡдимдәр эштә ҡулланыу өсөн район мәғариф бүлектәренә ебәреләсәк.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Шәйехзада Бабич исемендәге премияға ғаризалар ҡабул итеү ваҡыты 20 августа тамамланды. Был премия мәҙәниәт үҫешенә тос өлөш индергән өсөн бирелә. Награда һәләтле һәм инициативалы йәштәрҙе дәртләндереүгә йүнәлтелгән. Премия йәш яҙыусыларға, рәссамдарға, артистарға, музыканттарға, архитекторҙарға һәм режиссерҙарға ике йылға бер тапҡыр тапшырыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республика етәксеһе Радий Хәбиров ҡарары менән премиялар күләме 150 мең һумдан ярты миллионға тиклем арттырылды.

✓Өфөлә Рәсәй йәштәренең VI йәйге спартакиадаһы тамамланды. Команда ярыштарында республикабыҙҙың рапирасылар командаһы алтын миҙал яуланы. Йыйылма команда составында Искәндәр Булатов, Валерий Корнилов, Әмир Фәхретдинов һәм Дәүләт Хәйретдинов сығыш яһаны. Башҡортостан спортсыларының еңеүе тураһында республиканың спорт министрлығы хәбәр итә. Шәхси зачетта Любовь Емелёва рапирасылар араһында турнирҙа икенсе булһа, Валерий Корнилов һәм Таисия Ларькина бронза миҙал алды. Бынан алдараҡ 2026 йылда Өфөнөң йәйге спорт төрҙәре буйынса Иң көслөләр спартакиадаһын ҡабул итергә әҙерләнеүе тураһында хәбәр ителгәйне.

✓Аҡъяр ауылының Төньяҡ-Көнсығыш биҫтәһе паркында МХО-ла һәләк булған яугирҙарға арналған мемориал асырға әҙерләнәләр. Хәйбулла районы хакимиәтендә белдереүҙәренсә, һәйкәлдән тыш, бында хәрби техника ҡуйыла һәм яңы аллея булдырыла. Төҙөүселәр эштәрҙе ағымдағы йылдың октябренә, районның юбилейына тамамларға ниәтләй.

✓Башҡортостанда II кварталда ипотека баҙары йәнләнде. 2025 йылдың апрель-июнь айҙарында Башҡортостанда йәшәүселәр 8 мең ипотека алған. Был иһә ғинуар-мартҡа ҡарағанда 53 процентҡа күберәк. Уларҙың аҡса күләме I кварталға ҡарата 73 процент (28 миллиард һумға тиклем) артҡан. Дом.РФ мәғлүмәттәре буйынса, ил буйынса ипотекалар иҫәбендә республиканың өлөшө 4,4 процент тәшкил итә. Ипотека баҙарында әүҙемлек буйынса Башҡортостан 5-се урынға күтәрелде. Мәскәүҙә һәм Мәскәү өлкәһендә, Санкт-Петербургта һәм Төмән өлкәһендә генә ипотека кредиттары күберәк. Хәбәр иткәнебеҙсә, II кварталда Өфөлә яңы төҙөлгән йорттарҙа фатир һатыу 14 процентҡа артҡан.

✓Магнитогорск - Ира юлында Ҡашҡар ауылы янында урынлашҡан Йылайыр йылғаһы аша күперҙә планлы ремонт башланды, тип хәбәр иттеләр республиканың Транспорт министрлығынан. Подряд ойошмаһы тротуарҙарҙы тергеҙеү һәм ҡоймаларҙы ремонтлау менән шөғөлләнә. Бөтә эштәр 31 августа тамамланырға тейеш. Күпер Ҡашҡар, Исҡужа, Юлдыбай һәм 2 меңдән ашыу кеше йәшәгән башҡа ауылдарҙы Йылайыр районы үҙәге менән бәйләй, транспорт артерияһының тотороҡлоғон тәьмин итеүҙә мөһим урын биләй.

✓ *Республикала хеҙмәткә яраҡһыҙ инвалидтар һаны арта. 2014-2022 йылдар эсендә кәмей төшкән был күрһәткес һуңғы осорҙа кинәт 5 меңгә артып китте. Республикала бөгөн барлығы 250 меңдән ашыу инвалид иҫәпләнә.*



*БАШ ҠАЛАМ*



# ҠЫШҠА ЛА ӘҘЕРЛӘНӘ...

**Өфө тураһында үҙемдең фекерҙәремде әйтеп үтәйем тием. Баш ҡалала йәшәгәс, уның тураһындағы уйҙар, уңыштарына - ҡыуаныуҙар, башҡарылған эштәрҙе һәм планлаштырылғандарын барлап үтеү һәр өфөләнең бурысылыр.**

Мин үҙем бик әүҙем кеше. Төрлө спорт, мәҙәни сараларҙа, акцияларҙа ҡатнашырға яратам. Күптән түгел үҙем өсөн бик тә шәп хәйриә акцияһын астым - ул "Кешене эҙләйем" тип атала һәм хужаһыҙ эттәргә ярҙам итеү йәһәтенән ойошторола. Баш ҡаланың төрлө парктарында үткән был акцияның әүҙемләшә, үткәрелгән һайын күберәк кеше йәлеп итеүен күреү ҡыуаныслы. Ҡала мэры Ратмир Мәүлиев башланғысы менән уҙған был акция өфөләрҙең беҙҙең дуҫтар - эттәргә, уларҙың яҙмышына битараф булмауын асыҡ күрһәтә. Кешелеклелек юҡҡа сыҡмаған баш ҡалабыҙҙа.

Өфөнөң Силикатная урамында йәшәйем. Быйыл йәй беҙҙең урамда юлды төҙөкләндереү эштәре башланды һәм оҙаҡламай тамамланасаҡ. Яңы асфальт һалыу эше алып барыла, шулай уҡ тротуарҙы төҙөкләндереү ҙә әүҙем генә бара. Был эштәр тамамланғас, юл билдәләрен һалып ҡуйыу өсөн ҡоро көндәрҙең тороуы ғына шарт. Әлеге төҙөкләндереү урамыбыҙҙың йөҙөн генә йәмләндереп ҡалмай, ә машиналарҙың йөрөүен хәүефһеҙерәк тә итә.

Был турала яҙғандары ла булды, буғай, шулай ҙа мин дә үҙ фекеремде еткергем килә. Һүҙем Салауат Юлаев һәйкәле аҫтында йылға яры буйында уҙғарылған төрлө саралар тураһында. Төрлө пландағы һәм темалы концерттар үтеүе, оҫталыҡ дәрестәре уҙыуы, ижади оҫтаханаларҙың эшләүе, кинолар күрһәтелеүе һәм башҡа төрлө саралар был урынды ныҡ йәнләндерә. Өфөнөң мәҙәниәте ошондай күптөрлө һәм сағыу булыуы шатландыра.

Оҙаҡламай һыуыҡтары, бурандары менән ҡыш та етәсәк. Өфө буйлап күп йөрөргә тура килгәс, ҡаланың хужалыҡ ойошмалары тарафынан алып барылған әҙерлек эштәрен күреп йөрөйөм. Әле күптән түгел Калинин районында булғанда йылытыу торбаларын алыштырып йөрөгәндәрен күҙәттем. Һәм водителдәр өсөн иң ҡыуаныслыһы - "БашРТС" ойошмаһы эш барышында Интернационал урамын япмаған ине. "Йәйгә сыҡһаң, ҡышты уйла, ҡышҡа инһәң, йәйҙе уйла", тигән боронғолар. Ҡаланың торлаҡ-коммуналь хужалығы тармағында эшләүселәр өсөн ҡыҙыу осор хәҙер. Эштәре уңышлы булһын.

**Илсен КӘЛИМУЛЛИН.**

*ӘЙТЕРҺҮҘЕМ...*

# НИҢӘ АУЫЛЫҢДЫ ТАШЛАЙҺЫҢ?

## Үҫтер, етештер, һат!

**Бер уйлаһаң, бөгөнгө ығы-зығылы заманда ауылды ла ташлап китерме кеше! Күңелгә һил, тыныс, күкрәк тултырып һуларға һауаһы саф, шишмә һыуылай таныҡ. Үҙ ҡулдарың менән үҫтергән химияһыҙ хәләл ризыҡ... Хәҙер ҡала халҡының да күпселеге тип әйтерлек иркенлек, һиллек эҙләй, йөрөп эшләргә хәленән килгәндәр Өфө яны ауылдарына күсенеүҙе өҫтөн күрә. Ә ҡала халҡы ситтән килеп фатир һатып алыусылар, мигранттар иҫәбенә арта бара.**



Һуңғы мәғлүмәттәр нимә тей был хаҡта? Kommersant.ru сайтының 31 июнь сығарылышында, Башҡортостан ауылдарында халыҡ һаны кәмей бара, тип, медицина тергеҙеүе буйынса төбәк программаһына һылтанма бирелә. Былтырғы йылдың баштарында республика ауылдарында 1,5 млн кеше йәшәп, улар төбәк халҡы һанының 37,4 процент өлөшөн тәшкил иткән, ә 2023 йыл эсендә 15 мең кешегә кәмегән. Шуларҙың 7,2 меңе тәбиғи кәмеүҙәр иҫәбенә инһә, 8,1 меңе - ауылды ташлап китеүселәр. Ә ҡала халҡының һаны шул уҡ осорға 2,5 миллион тәшкил итеп (62,6 процент), бер йыл эсендә 2 мең кешегә артҡан. Ә тотош республика буйынса халыҡ һаны бер йыл эсендә генә лә 22 мең кешегә кәмегән, тип яҙа News-Bash сығанағы.

Башстат мәғлүмәттәре буйынса, быйылғы йылдың тәүге айҙарында ғына 609 кеше республиканы ташлап сығып киткән. Бигерәк тә Йылайыр районынан китәләр, был йәһәттән район антирейтинг исемлегендә беренсе тора, тип хәбәр итә Башстат. Унан ҡала Йәрмәкәй, Мишкә, Мәсетле, Стәрлебаш һәм башҡалар. Китмәҫтәр ҙә ине, бөтәбеҙгә лә мәғлүм: был райондарҙа халыҡҡа эш юҡ, шуға күрә хәҙер нисә йыл буйына ир-егеттәр төньяҡ тарафтарға вахта эшенә ағыла һәм уларҙың һаны һис кәмемәй; күрше Татарстанға күсеп китеүселәр ҙә байтаҡ.

Яҡшы тормоштан түгел инде: демографик хәлгә бәйле тағы бер хәүеф тыуып тора: республикала хеҙмәткә яраҡһыҙ инвалидтар һаны арта. 2014-2022 йылдар эсендә кәмей төшкән был күрһәткес һуңғы осорҙа кинәт 5 меңгә артып китте. Республикала бөгөн барлығы 250 меңдән ашыу инвалид иҫәпләнеп, был бөтөн төбәк халҡы һанының 6 процентын тәшкил итә. Өҫтәүенә, сүп өҫтөнә сүмәлә, тигәндәй, тағы бер хәбәр тетрәтте: Башҡортостанда шәкәр диабеты менән сирләүселәр һаны арта икән. Был хаҡта Ufacity News.ru хәбәрсеһе "Шәкәр диабеты менән көрәш" төбәк программаһы мәғлүмәттәренә нигеҙләнеп яҙып сыҡты. Был документтан күренеүенсә, былтыр республикала 161 221 диабет сире асыҡланған, ә унан алдағы йыл ғына әле был күрһәткес 120 354 осраҡ булған. Шуныһы хәүефле: былтыр шәкәр сире 1 369 балала, 481 үҫмерҙә һәм 159 371 өлкән кешелә табылған. Сирлеләр һанының кинәт артыуын рәсми сығанаҡта властар диабет сирен асыҡлау буйынса һөҙөмтәле саралар үткәреүҙән, тип билдәләһә, өлкәндәр араһында иһә диспансерлаштырыу һәм башҡа профилактик тикшереүҙәр ярҙамында мәғлүм булды, тип иҫәпләй.

Әйе, шулайҙыр, ләкин был һылтанма сирҙең

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# СҮП-САР АТАМАЛАР

**Урамдағы төрлө яҙыуҙарҙы уҡый алмай, аңлай алмай, бөтөнләй баштар ҡата. Сит ил атамаларын сикләргә кәрәктер, тип уйлайым. Үҙенең туған телен дә, рус телен дә тулыһынса, ысын мәғәнәһендә төптән белмәгән үҫмерҙәргә теләһә ниндәй мәғәнәһеҙ атамалар ҙур зыян килтерә, уларҙың баштарына сүп-сар тултыра бит.**

Сит телдә яҙылған һүҙҙәрҙе уҡыған һайын бер актрисаның радио аша һөйләгән иҫтәлеге хәтергә килә. Бер саҡ ул сит илгә сәйәхәткә сығырға әҙерләнә. Сит телдәге яҙыу яҙылған футболка һатып алып кейә. Ләкин ҡала урамдарына сыҡтымы, ирҙәрҙең әленән-әле һүҙ ҡушыуына, нимәлер ишаралауына аптырап бөтә. Танышына: "Бында ирҙәр шундай сәйер. Күҙҙәре йылтырап, миңә ҡулдарын һуҙырға ғына торалар", - тип зарлана. Танышы: "Бәй, һинең футболкаңда "Мин ирҙәрҙе яратам" тип яҙылған бит", - тип көлә. Актриса: "Ә мин "Мин кешелек донъяһын яратам" тип яҙылған икән тигәйнем ул яҙыуҙы", - тип көрһөнә.

Шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич та наҙандарҙан көлөп, "Сеп-сей наҙан" шиғырын яҙған бит:

Бер әҙәм: "Русса беләмһең һин?" - тип
Һораны. Мин әйттем: "Беләмен мин", - тип.
"Знакум, я бит ничауа незнаем!"
"Шәп икәнһең руссаға, Шайкулзадам,
Кем өйрәтте, әйтсе?" - тине ул әҙәм.
Мин был һүҙгә аптырап торҙом; ләкин
Аңланым тиҙ: ул икән сеп-сей наҙан!

"Культура" каналындағы "Разночтение" тапшырыуында шағир, журналист Тимур Кибиров әйткәнсә: "Асыҡ хулиганлыҡ арҡаһында йәштәрҙең, үҫмерҙәрҙең телмәре ярлылана, матур һүҙ ҡиммәттәре юйыла, онотола". Эйе, бик тә дөрөҫ: хаталы яҙыуҙарҙан - сүп-сар атамаларҙан ҡалабыҙҙы таҙартайыҡ. Шағирыбыҙ Рәми Ғарипов өндәгәнсә, "Телебеҙҙең ҡәҙерен беләйек!" Уның "көслө лә ул, бай ҙа, ағымлы ла" икәнен онота күрмәйек.

**Айгөл АХУНОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Салауат ҡалаһында "Күн туп - Йәш футболсылар лигаһы" футбол ярыштарының финал этабы үтте. Турнирҙа Рәсәйҙең һигеҙ төбәгенән спортсылар ҡатнашты. Октябрьский ҡалаһының 4-се спорт мәктәбе командаһы үҙ төркөмөндә беренсе урынды яуланы һәм Волгоградта Рәсәй Суперкубогында ҡатнашыу хоҡуғын алды. Был хаҡта социаль селтәрҙә ҡала мэры Алексей Пальчинский хәбәр итте. Хәбәр иткәнебеҙсә, Башҡортостан мәктәптәренең футбол командалары Бөтә Рәсәй турниры финалына сыҡты.

✓ Ғафури районының Ташаҫты ауылында Еҙем йылғаһы аша йәйәүлеләр күперен йүнәтәләр. Был хаҡта район хакимиәте башлығы Венер Вәхитов хәбәр итте. "Подрядсы һәм Имәндәш ауыл советы башлығы Әхнәф Нуғайғолов менән барлыҡ нескәлектәр һәм сроктар тураһында һөйләшеп килештек. Эштәр башланған, август аҙағына тиклем тамамларға кәрәк. Ауыл халҡы был осорҙа Еҙем йылғаһы аша һалынған ваҡытлыса баҫманан йөрөй", - тип яҙҙы Вәхитов.

✓ Республикабыҙҙан МХО ветераны Ватанды һаҡлаусыларҙың йәйге кубогында ҡатнаша. Бөтә Рәсәй ярыштары 18-22 августа Дзержинск ҡалаһында ойошторола. Мишкә районынан МХО ветераны Рәмил Сәлихов пауэрлифтинг һәм бысаҡ һелтәү дисциплиналарында сығыш яһай. Рәмил Сәлихов 2023 йылдың ноябрендә Махсус операция биләмәһенә хеҙмәт итергә китә. Донецк Халыҡ Республикаһы, Луганск Халыҡ Республикаһы, Запорожье һәм Херсон өлкәләре территорияһында хәрби бурыстарҙы үтәй. Ҡаты яраланғандан һуң тыуған районына ҡайта.

✓ Рәсәйҙәргә кредит биреү шарттарында яңы пункт барлыҡҡа килде. Тиҙҙән банктар һәм башҡа кредиторҙар Федераль һалым хеҙмәте һәм Социаль фонд мәғлүмәттәре буйынса граждандарҙың рәсми килемен генә иҫәпкә алырға тейеш. Планға ярашлы, кредиторҙар бер минут эсендә "Һанлы профиль" сервисы аша Федераль һалым хеҙмәте һәм Социаль фондтың мәғлүмәт системаһынан кәрәкле мәғлү-мәттәр алырға хоҡуҡлы. Шул уҡ ваҡытта граждандарҙың рәсми килеме тураһында башҡа мәғлүмәт сығанаҡтарын йәлеп итеү мөмкинлеге һаҡлана, тип билдәләнеләр Үҙәк банкта.

✓ Баймаҡ районында йәшәүселәр хәбәр итеүенсә, 1-се Төркмән ауылында ете атты йәшен атҡан. Малҡайҙарҙы ҡотҡарып ҡала алмағандар. "Аттар ауыл янындағы электр бағаналары тирәһендә йөрөй ине. Бер ваҡыт гөрһөлдәгән тауыш ишетелде. Аттарҙы йәшен һәләк иткән", - тип һөйләне Эльвира Сәлихова.

*✓ Картуфты республикабыҙҙың төньяҡ-көнсығыш биләмәһендә, Салауат районының Мөрсәлим һәм Ишембай ауылдары янында үҫтереү ҡарала. Ошонда уҡ йәшелсәне һаҡларға һәләтле ҡеүәттәр булдырыу ҙа планлаштырыла.*



барлыҡҡа килеү сәбәптәрен түгел, ә һандарҙың артыуы өсөн аҡланыу кеүегерәк тойолоп китә. Ә сәбәптәр, беҙҙең ихтыярҙан тормаған нәҫел "бүләген" иҫәпләмәгәндә, эргәбеҙҙә генә, көндәлек йәшәйеш рәүешебеҙгә бәйле. Сер түгел, күпселек ғаиләләрҙә туҡланыу рационы бик ярлы: әлеге лә баяғы макарон да картуф та хәүефле колбаса изделиелары һәм химияла үҫтерелгән йәшелсә-емеш. Шуға бәйле медиктар шәкәр сиренең ҡайһы бер киң таралған сәбәптәренең береһен углеводтарға бай һәм нығ ҡына сәнәғәт эшкәртеүе үткән (ризыҡ тип әйтергә тел әйләнмәй) продукт төрҙәре менән туҡланыуҙан, тип аңлата. Башстат мәғлүмәттәре буйынса республикала уртаса эш хаҡы 70 мең тип күрһәтелһә лә, күпселек өсөн был һан буй еткеһеҙ сумма икәне сер түгел. РИА Рейтингтың былтырғы мәғлүмәте Башҡортостандың тормош сифаты буйынса 22-се урында булыуын күрһәтте. Диабет сиренең ҡалған сәбәптәре лә туранан-тура йәшәйеш кимәленә бәйле: бер төрлө туҡланыу, стресс, тыныслыҡһыҙ тормош шарттарына бәйле көүҙә ауырлығы артыу; ашҡаҙан аҫты биҙҙәре, эндокрин сирҙәр; йоғошло ауырыуҙарҙың ҡатмарлашыуы һ.б.

Ошо көндәрҙә генә Известия.ру сайты Annals of Internal Medicine журналында махсус тикшеренеү һөҙөмтәһе баҫылған мәҡәләгә һылтанып, шәкәр сиренән үлем осраҡтарын кешенең оҙайлы физик әүҙемлеге кәметә ала, тигән асыш хаҡында хәбәр итте. Ә шулай ҙа демография торошона иң күп һанлы юғалтыуҙар өлөшө йөрәк-ҡан тамырҙары сиренә тап килә һәм был республикабыҙҙа ғына түгел, дөйөм Рәсәй буйынса ла шулай. БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса былтыр үлемгә килтереүсе сирҙәр исемлегендә ҡан әйләнеше системаһы сирҙәре беренсе урында тора һәм ул 33,1 процент тәшкил иткән.

Был проблеманы хәл итеү буйынса ошо көндәрҙә яңы стандарттар тураһында норматив акттар порталында бер документ баҫылып сыҡты. Эйе, ыңғайҙы һәм бөгөн тормошобоҙҙа һирәк ҡунаҡ булған ҡыуаныстарҙы ла күрә белергә кәрәк беҙгә, гәрсә әлегә ул ҡағыҙҙа ғына булһа ла. Ләкин уның бойомға ашырыласағына өмөт бағларға кәрәктер, ни тиһәң дә, ул туранан-тура илебеҙ яҙмышын билдәләүсе өҫтөнлөклө мәсьәлә - демография хәленә бәйле бит. Әйтеүемсә, миллиондар ғүмерен ҡотҡарасаҡ был проект ҡан баҫымы сирҙәрен дауалауға әлегесә 10 көн түгел, ә бер йылға тиклем ваҡыт бүлергә һәм уны иғтибар үҙәгенә алырға ниәтләй. Ҡан баҫымын дауалауҙың яңы стандарттары программаһы РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тарафынан эшләнгән. Яҡшыны яҡшы тиһең инде, ләкин ул һәр ваҡыттағыса формаль төҫ алып йә ҡағыҙҙа ғына тороп ҡалмаһын ине...

Ауыл, тип башлағайныҡ бит әле яҙманы. Был юҫыҡта ла республикабыҙ кимәлендә бер яҡшы ниәт тыуып тора: инвесторҙарға Башҡортостанда картуф үҫтереүгә һәм йәшелсә һаҡлағыс төҙөүгә аҡса һалырға тәҡдим булды. Проекттың хаҡы 156,5 миллионға баһалана. Картуфты республикабыҙҙың төньяҡ-көнсығыш биләмәһендә, алдан күҙаллауҙар буйынса, Салауат районының Мөрсәлим һәм Ишембай ауылдары янында үҫтереү ҡарала. Ошонда уҡ йәшелсәне оҙаҡ ваҡыт һаҡларға һәләтле ҡеүәттәр булдырыу ҙа планлаштырыла. Бына ауыл халҡына эш! Әгәр ниәттәр барып сыҡһа...

Ә бит башҡа районда ла ҙурҙан ҡупмағанда ла бәләкәй һәм уртаса хужалыҡтар ойоштороға була һәм мотлаҡ картуф үҫтереү генә түгел, башҡа төр йәшелсәләр буйынса махсуслашырға мөмкин. Ошо тәңгәлдә элекке совет осорондағы данлыҡлы Иглин, Нуриман һуғаны иҫкә килеп төшә. Яңылыҡ - ул онотолған иҫкелек, тигәндәй, был эште лә аяҡҡа баҫтырырға, халыҡты эш менән тәьмин итергә була. Ҡасандыр беҙҙә ҡаҙ үрсетеү шөғөлө лә башланып киткәйне, әле был эште "Башҡортостан ҡошо", "Хан Мырҙа" ҡаҙ фермаһы кеүек ҙур предприятиелар үҙ ҡулына алды, тик уларҙың продукцияһын сауҙа кәштәләрендә һирәк күрергә тура килә. Бәлки, уларҙың башҡа төрлө сауҙа ысулдары барҙыр - беҙгә билдәһеҙ, ләкин ауыл халҡы үҫтергән ҡаҙҙарҙы ла һатып алып, бәләкәй бизнесҡа ярҙам итә алыр ине ҙур предприятиелар. Был да бит ауыл халҡының мәшғүллегенә юл асып ебәрер бер сара.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ТЫНЫСЛЫҠҠА ЫНТЫЛЫШ ЯҺАЛДЫ



**Эйе, йылдар буйы һуҙылып килгән мәсьәләләрҙең бер осрашыу мәлендәге ике сәғәт ярым эсендә генә хәл ителмәйәсәге көн кеүек асыҡ ине инде, ә шулай ҙа зарығып көтөлгән тыныслыҡ һәм аңлашыуҙарға табан бер аҙым яһалыуы ыңғай күренеш булды, тип баһаланды рәсми даирәләрҙә.**

Аляска осрашыуҙары хаҡында һүҙ барыуы аңлашыла торғандыр, сөнки Трамптың Украина конфликты буйынса "әлегә тулыһынса аңлашыуға өлгәшеп булмауы" сәбәпле үкенес белдереүенә ҡарамаҫтан, Рәсәй Президенты Владимир Путин менән АҠШ лидеры Дональд Трамптың юғары кимәлдә дүрт йыл эсендә тәүге тапҡыр күҙмә-күҙ осрашып һөйләшеүе һуңғы йылдарҙа Рәсәй - Америка мөнәсәбәттәрендә барған һалҡын һуғыштың иң түбән нөктәһенә тәгәрәүен туҡтатыу йәһәтенән мөһим булыуына ишара яһалды.

Тәүҙә тап ошо ике ил араһында аңлашыу булдырыуҙың Украина конфликтын көйләүгә илтәсәге былай ҙа аңлашылып тора. Был хаҡта Путин ике ил араһында "...өлгәшелгән аңлашыуҙың төп маҡсатты яҡынайтыуға һәм Украинала тыныслыҡҡа юл асыуына булышлыҡ итәсәгенә" өмөт бағлауын белдерҙе. "Беҙ Киевтың һәм Европа баш ҡалаларының ошо ынтылышты аңлап ҡабул итеүенә һәм был юлда ниндәйҙер кәртәләр ҡормаясағына иҫәп тотабыҙ", - тип айырымасыҡ әйтте Владимир Путин матбуғат конференцияһында яһаған сығышында. Артабан ул АҠШ-та власть башына Трамп етәкселегендәге яңы хакимиәт килеүенең ике яҡлы тауар әйләнешенә юл асыуын билдәләп, Рәсәй менән Америка араһында киләсәктә хеҙмәттәшлек итеү өсөн бик күп ҡыҙыҡлы, ике яҡ өсөн дә файҙалы йүнәлештәр, эшлекле даирәләр һәм инвестиция партнерлығы өлкәһендә сикһеҙ мөмкинлектәр булыуы хаҡында әйтте. Шул уҡ ваҡытта Арктикала үҙ-ара аралашыу, беҙҙең Алыҫ Көнсығыш менән АҠШ-тың Көнсығыш яр буйҙары төбәк-ара бәйләнештәрен тергеҙеү киләсәген күҙаллап, Рәсәй Президенты ике илде "киләсәктең яңы битен асып, хеҙмәттәшлеккә ҡайтырға" саҡырҙы. Сығышының тәүге юлдарынан уҡ Путин ике яҡлы һөйләшеүҙәрҙең файҙалы һәм үҙ-ара ихтирамлы шарттарҙа үтеүе һәм үҙен Аляскаға саҡырыуҙары өсөн Трампҡа рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе.

Үҙ сиратында АҠШ президенты Дональд Трамп та эшлекле осрашыу өсөн коллегаһына рәхмәт белдерҙе. Шул уҡ ваҡытта ул ошо осрашыуҙың киләсәктә тыныслыҡ булдырыуға ышаныс тыуҙырыуын әйтте. "Путиндың да, минең кеүек үк, конфликтты тиҙерәк хәл итергә теләүен" әйтеп, Трамп осрашыуҙа ошо юлда ярайһы ғына прогресҡа өлгәшә алыуҙарын билдәләне. Аляска осрашыуынан һуң Вашингтонға ҡайтышлай Fox News телеканалына интервьюһында Дональд Трамп Рәсәй-Украина конфликты буйынса тыныслыҡ килешеүенә өлгәшеү өсөн Украина президенты Владимир Зеленский менән Европа илдәре вәкилдәренең дә ҡатнашлығы кәрәк булыуын белдерҙе."Хәҙер, ысынлап та, бөтәһе лә президент Зеленскийҙан тора. Европа илдәре лә бер аҙ ҡатнашлыҡ итергә тейештер, ләкин был Зеленскийға бәйле", - тине ул һәм үҙе, Владимир Путин, шулай уҡ Зеленский ҡатнашлығында өс яҡлы осрашыуға әҙерлектең башланыуы тураһында хәбәр итте. Путин менән осрашыуҙан һуң Трамп Рәсәйгә ҡаршы сикләүҙәрҙе, шулай уҡ Ҡытайға Рәсәй энергетика ресурстарын һатып алыуҙа санкцияларҙы кисектереп торорға булды. Әйткәндәй, Ҡытай менән Рәсәй мөнәсәбәттәренә ҡағылып, Трамп үҙенә хас туралыҡ менән "Ҡытайға Рәсәйҙең ерҙәре кәрәк" тип тә белдерҙе.

Трамп Путин менән осрашыуға барыр алдынан уҡ "юғары иҫәпкә" йүнәлеш тотоу кәрәклеге хаҡында үҙенекеләрҙе иҫкәрткәйне инде. Шуға күрәләр ҙә, уның өсөн аныҡ һөҙөмтәгә килә алмау көтөлмәгән хәл булманы, киреһенсә, ул быны "ярайһы прогресс" тип атаны, ләкин бына Көнбайыш киң мәғлүмәт саралары төп мәсьәләлә аныҡлыҡтың булмауына дәғүә белдерә. Мәҫәлән, Washington Post яҙып сығыуынса, осрашыуҙың Украинала Трамп ынтылған кисекмәҫтән тыныслыҡ урынлаштырыуға алып килмәйәсәге асыҡланғас та саралар планлаштырылғандан алдараҡ тамамланды, "өлгәшелгән прогресс" хаҡында аныҡ хәбәр ителмәне, лидерҙар хатта журналистарҙың һорауҙарына ла яуаптар бирмәне. Журналистар менән аралашырға яратҡан Трамп өсөн бындай тотанаҡлыҡ һирәк күренеш булды, тип яҙҙы үҙенең либераль ҡараштары менән билдәле Америка матбуғат баҫмаһы.

CNN телеканалы элек Трамптың кәңәшсеһе булып эшләгән Джон Болтон менән әңгәмәнән уның һүҙҙәрен килтерә: "Трамп еңелде тип әйтә алмайым, ләкин Путин һис һүҙһеҙ отто".

Telegraph яҙып сығыуынса, Путиндың Аляскаға килеүе Рәсәйҙең ҡамауҙан сығыуын күрһәтте: "Путин АҠШ президентының ҡулын ҡыҫты һәм изоляциянан донъя сәйәсәте юғарылығына әйләнеп ҡайтты"

TheWall Street Journal билдәләүенсә, Рәсәй Президенты саммитта үҙенең төп маҡсатына ирешә - донъя лидеры булараҡ ҡайтанан аҡланыуға өлгәшеү өсөн уға бер ниндәй сигенеүҙәргә лә барырға тура килмәне; саммит уның Көнбайыш тарафынан изоляцияланыуына сик ҡуйҙы.

**Әйткәндәй, Трамп 18 августа Вашингтонда Зеленский һәм Европа илдәре лидерҙары менән осрашып һөйләште. Аҙаҡтан ул Рәсәй Президентына шылтыратып, Зеленский менән һөйләшеү һөҙөмтәләре тураһында хәбәр итте. Телефондан һөйләшеүҙә Рәсәй һәм АҠШ президенттары артабан да бер-береһе менән украин һәм башҡа халыҡ-ара мәсьәләләр буйынса тығыҙ бәйләнештә булырға һөйләшеп килеште.**

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә, АРТ-Квадрат үҙәгендә, Самауыр көнө үтте. Унда Башҡортостан Милли музейы фондында һаҡланған самауырҙар күргәҙмәһе ҡуйылды. Һәр кем сәй эсеүҙең бай тарихы һәм йолалары тураһында белә алды. Көн дауамында төрлө оҫталыҡ дәрестәре ойошторолдо. Ҡунаҡтар үҙҙәренең көсөн перәник һәм ағас самауырҙар биҙәүҙә, шулай уҡ керамик брошкалар эшләүҙә һынап ҡарай алды. Әлбиттә, Самауыр көнөнөң ысын хиты сәй булды. Баллы үлән сәйен татып ҡарар өсөн халыҡ ҙур сиратҡа баҫты.

✓Өфөнөң 58-се лицейын тамамлаған Тимур Ғарифуллин 2-8 августа Ҡытайҙа үткән яһалма интеллект буйынса халыҡ-ара олимпиадала алтын миҙал яулаған өсөн баш ҡала мэрияһының рәхмәт хаты менән бүләкләнде. "Тимурға ныҡышмалылығы, тырышлығы һәм еңеүгә ынтылышы, уның остазына - һөнәри оҫталығы, ә әсәһенә ярҙамы өсөн рәхмәт белдерәбеҙ", - тип билдәләнеләр ҡала хакимиәтенең оператив кәңәшмәһе барышында уҙған бүләкләү тантанаһында. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Тимур Ғарифуллин Пекинда үткән халыҡ-ара ярышта юғары класс уҡыусылары араһында алтын миҙал яуланы. Ә быйыл яҙ илдең иң яҡшы AI-белгестәре иҫәбенә инде - яһалма интеллект буйынса Милли технологик олимпиада (НТО) финалында еңде.

✓7 сентябрҙә Өфөлә халыҡ-ара изгелек марафоны ойоштороға. Унда теләгән һәр кем ҡатнаша ала. Изге йүгерек (благобегун) - Өфө хосписы тәрбиәләнеүселәренә ярҙам итеү марафоны сиктәрендә аҡса йыйған кеше. Быны өсөн йүгереү мотлаҡ түгел, иғәнә йыйыу менән генә лә сикләнергә мөмкин. Марафонда тәжрибәле спортсылар ҙа, яңы йүгерә башлағандар ҙа, хатта балалар ҙа ҡатнаша ала (марафонға билетты үҙаллы һатып алырға мөмкин).

✓Өфө фотографы Гөлнара Шаньгинаның ике ике эше "Ғаилә сәнғәт булараҡ" Халыҡ-ара күргәҙмәһендә ҡатнашыу өсөн һайлап алынған. Белоруссияла ойошторолған мәртәбәле был сарала өс мең автор ҡатнаша. Яҡташыбыҙҙың фотоһүрәттәре Минск ҡалаһының Сәнғәт һарайындағы экспозицияға ҡуйылған. Был күргәҙмәлә ғаиләнең бәхетле мәлдәрен йәки өй мөхитен һүрәтләгән фотолар ҡатнаша. 700 квадрат метр майҙанды биләгән экспозицияны Минск халҡы һәм ҡала ҡунаҡтары 31 августҡа тиклем ҡарай ала.

✓Баш ҡаланы йәшелләндереүсе "Горзеленхоз" ойошмаһы Өфөнөң Менделеев урамын ҡоро һәм ҡартайған ағастарҙан таҙарта башланы. Был хаҡта Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы етәксеһе Арсен Латипов хәбәр итә. Ағастарҙы ҡырҡыу халыҡтың именлеге, ҡала урмандарын һауыҡтырыу өсөн дә кәрәк, тип билдәләне ул.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

БОРОНҒО АМАНАТ

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

## Утҡа ҡағылған тыйыу

Боронғо ҡәүемдәр ҡарашынса, ут тере лә, изге лә. Әкиәттәрҙә ут - батша. Абдулҡадир Инандың "Шаманизм тарихта һәм бөгөн" хеҙмәтендә ут рухына, культына бәйле тәү асылдар күрһәтелә. Йүлгән тәңре кешеләрҙе ут тоҡандырырға өйрәткән һәм: "Был ут атабыҙҙың көҙрәтенән сыҡҡан ялҡын", - тигән. Шунан бирле алтай, яҡут ҡәүемдәрендә саҡматаштар ут ҡото биреүсе һанала. Алтайҙарҙың доғаларында ут "кояш менән айҙан бүлеп сығарылған" тиелә, уның тураһында көфөр, хилаф һүҙҙәр әйтелмәй. Утҡа төкөрөү, ут менән уйнау ҡәтғи рәүештә тыйыла. Төркиҙәр утҡа доғалар уҡыған, ҡорбан һонған. Уларҙың инаныуынса, ут насар рухтарҙы ҡыуған, һәр нәмәне таҙартҡан.

Шамандар утҡа ҡарап күрәҙәлек ҡылған, юраған. "Манас" эпосында Манастың бабаһы Жакип хан утҡа бағып килендәренә уларҙы нимә көтәсәген әйткән. Яҡуп хан иһә яҙмышының нисек булырын белер өсөн һәр ваҡыт ут ярҙамында күрәҙәлек иткән. Үзбәк ханы Кожугум сатырҙан сатырға йөрөп, утҡа ҡарап, усаҡҡа май һалып, ҡатындарға кемдең улы, кемдең ҡыҙы буласағын әйткән. Уттың ялҡынына, ҡыҙыуына, ялҡын телдәренең төҫөнә, янған утындың сығарған тауышына ҡарап, ни булырын юрағандар.

Манси мифологияһында ут хужабикәһе - ете телле, ҡыҙыл күлдәкле ҡатын. Ул утҡа ҡағылышлы йолаларҙы, тыйыуҙарҙы боҙған өсөн язаға тарттыра. Ут менән һаҡ эш итергә кәрәклек, был йәһәттән тыйыуҙар халыҡ әйтемдәрендә лә асыҡ сағылған: утҡа төкөрмә, ауыҙың бөрөшөр; ут менән шаярмайҙар; балтанан ҡурҡма, уттан ҡурҡ; ут менән һыу бөтә нәмәне юҡ итә; бурҙан ҡала, уттан ҡалмай, ҡалһа ла көл генә ҡала... Халыҡ аҡылы йөшен утынан һаҡланыу кәрәклеген дә иҫкәртә: йөшен йәшнәгәндә яңғыҙ ағас аҫтында торма; тәҙрә тирәһендә торма; бисмилла әйт; башыңа кей; йүгермә; шым ултыр...

## Көнгә ҡағылған тыйыу

Халыҡ ижадында көнгә ҡағылған тыйыуҙар күҙәтелә. Көнсығыш роман ҡәүемдәре мифологияһында ундырышлылыҡты көйҙәләндергән сихырсы ҡыҙҙар үҙ көнөндә, йәғни 24 июндә, тыйыуҙарҙы боҙған өсөн һантыйлыҡ, һаңғыраулыҡ, телһеҙлек ебәрә.

Боронғо славян традицияһы ҡатнашсыһы Пятница көнөндә ҡатын-ҡыҙ йөн иләмәй, күлдәк йыумай. Пятницаның күҙен саңландырмаҫ өсөн ирҙәр ер һөрмәй. Тыйыуҙы боҙһаң, Пятница төрлө бәләгә дусар ҡылыуы, күҙ ауырыуҙарына һабыштырыуы ихтимал.

Телгә алыуыбыҙса, Библиялағы ун ҡанундың береһе шәмбе көнөнә ҡағыла. Уны изгеләштереү өсөн шәмбене хәтерендән сығарма, алты көн эшлә һәм үҙеңдең төрлө гәмәлдәреңде бойомға ашырыуға бағышла, ә етенсе көндө, шәмбене (әүәлгә көн иҫәбе буйынса шаббат аҙнаның һуңғы көнө) - Илаһҡа, үҙеңдең Аллаңа бағышла, был көндө бер эш тә эшләмә, үҙең дә, улың да, ҡыҙың да, ҡолоң да, малың да, өйөңә килеүсе лә, сөнки Илаһ күкте, ерҙе, диңгеҙҙе һәм уларҙағы бөтә нәмәне алты көндә бар иткән, ә етенсе көндө тынысланған, Илаһ шәмбе көнөнә фатиха ҡылып, уны изгеләштергән.

Мосолмандарҙа иһә әүәл йома ете көн араһы һаналып, был көн изгеләштерелгән. Ҡөрьәндә шулай тиелә: "Әй, иман килтергән кешеләр! Йома көндө намаҙға саҡырғас, Аллаһты зекер итергә ашығығыҙ һәм алыш-биреште ҡалдырып тороғоҙ. Беләһегеҙ килһә, был һеҙҙең өсөн тағын да хәйерлерәк булыр".

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

ИШАРАЛАП...

# ҮЛЕМДӘН ОЯТ КӨСЛӨ,

## йәки, Әрмеләге ваҡиғаларҙан



**Туғандарым менән, яҡты донъя менән хушлашҡандай булып, каптерка ишеген асып инеүем булды, мине унда ярым ҡараңғылыҡ һәм танауға бәрелгән тәмле аш-һыу еҫе ҡаршыланы. Бәй, каптерканың уртаһында ишеккә ҡарай һуҙып ултыртылған тар ғына өҫтәл артында мәжлес бара, имеш. Дембелдәрҙе оҙатыу тантанаһына йыйылғандар икән. Табын өҫтәлендә юҡ нәмәнең үҙе юҡ: итле ризыҡтарҙан, йәшелсә-емештән өҫтәл һығылып тора, коньяҡ коньяктары ла күренә. Өҫтәл артында ултырыусы грузиндар, әрмәндәр, гагауздар, тажиктар, ҡаҙаҡтар, чечендар, әзербайжандар үҙ телдәрендә гөбөр-гөбөр килә. Миңә иғтибар итеүсе лә юҡ...**

Мин йәш һалдат булараҡ, әҙәп һаҡлайым. Индем дә ҡатып ҡалдым. Күҙ ҡырыйы менән генә ҡарайым: бая мине рәнйеткән Вейсалов күренмәй, өҫтәлдең теге башында грузин егете Нарсия Эльдар ултыра, был яҡ башындағы урын буш. "Утябаев, ты в натуре мальчик что ли, садись, налейте ему, короче..." - тип әйтеп һалмаһынмы миңә черпак Эльдар. Күңел йылынып китте, ә мин һуғышырға әҙерләнеп килгән булдым бит әле. Стакандағы коньяҡ эсемлеге тамаҡҡа инеп киткәс, эҫе була башланы хатта. Бер-икене ҡабып алдым. Бер минут самаһы ултырғас, артымда каптерканың ишеге асылып китеүен ишеттем. Күңелем менән һиҙәм - Вейсалов. Килеп инеүсе миңә арт яҡтан яҡынлап, ҡулын яурыныма ҡаты ғына итеп һалды ла: "А этот дух почему сел на мое место, когда старший по званию подходит, что делают?" - тине. Мин аяғүрә баҫып, уға бороларға иттем. Минән дә алдараҡ Эльдар һикереп торҙо һәм ҡарсыға танауын алға төбәп, нәзек оҙон ҡәүҙәһен әйебәрәк, барыһын да һиҫкәндереrлек итеп: "Я всем говорю, короче, если хоть один волосок, короче, из головы Утябаева упадет, короче, тот будет иметь дело со мной, короче. Он же башкирский поэт, короче, что он потом будет писать о нас, короче. Вы же нацию свою позорите, короче. Вейсалов, найди себе место, короче, и садись, короче..." - тине ул барлыҡ Кавказ акценты ҡанундарына ярашлы итеп.

Быны шулай көтөлмәгән йүнәлеш алды Вейсалов менән минең ҡыҙҡыулашырға тейешле мөнәсәбәт. Дөрөҫөрәге, грузин егетенең урынлы-урынһыҙ "короче"лары менән тиҙ генә хәл ителде минең яҙмыш. Ел әрһә, ҡоларға әҙер торған сибек, әммә башҡаларға йөгонтоһо менән титаник ҡеүәткә эйә Нарсия менән бынан алда ла әңгәмәләшә торғайныҡ. Ул һәр осраҡта ла нисек итеп Өфөгә килеүе, ундағы нефть институтына һынау тотоп ҡарауы, әммә конкурстан үтә алмауын бәйән итә ине. Әммә Өфөлә булғаны, беҙҙең яҡты яҡшы белгәне өсөн генә ярҙамға килмәне Эльдар миңә. "Ты смог постоять за себя, короче, не побежал к офицерам. Вот из-за этого, короче, я уважаю тебя", - тине ул миңә мәжлес һуңынан тәмәке көйрәтергә сыҡҡанда.

Һуңынан да Эльдар мине бер нисә тапҡыр төн уртаһында уятып, гарнизонда урынлашҡан хәрби частарҙың ашханаларына, каптеркаларына үҙенең яҡташтарына ҡунаҡҡа алып йөрөнө. Тик ул дембелгә ҡайтҡанда хушлаша алманым, сөнки уны Әзербайжандың Куткашен (хәҙер Габала ҡалаһы) тигән ҡасабаһына оҙайлы командировкаға киткән урындан ҡайтарғандар. Исмаһам, адресын да алмағанмын үҙенең.

Вейсалов менән дә мөнәсәбәтебеҙ көйләнде. Дөрөҫөрәге, мин үҙебеҙҙең хәрби частың строевой бүлегендә хеҙмәт иттем, ә уға институтҡа инер өсөн яҡшы характеристика кәрәк ине. "Ҡағыҙ күтәрә ул", тип, үҙен ергә төшөрмәй маҡтап яҙып бирҙем, үҙемсә бының менән "гәйебемде" йомшартырға теләнем, буғай. Ул дембелгә киткәндә ҡосаҡлашып хушлаштыҡ, һәр хәлдә, ирҙәрсә аңлаштыҡ.

Хәҙер килеп, уйҙарым менән шул ваҡыттағы кисерештәремә кире әйләнеп ҡайтам да, үҙемде алъюҫыҡҡа рәнйетеүсегә ошо рәүешле итеп яуап биреүем менән, барыбер ҙә, дөрөҫ эшләгәнмен тип ҡуям. Мосолман дине мөхитендә үҫкән Вейсалов та үҙенсә дөрөҫ булғандыр, тием. Хатта ки, "Үлемдән оят көслө" тигән әйтемде уның ҡылығын аҡлар өсөн дә ҡулланырға булалыр. Моғайын, ул ғаиләһендә ныҡлы дини тәрбиә алғандыр һәм, моғайын да, уның ғаилә принциптарында мосолманға тыйылған ризыҡты ҡабул итеү үлемдән дә көслө оят, хурлыҡ булып иҫәпләнгәндер һәм шуның өсөн дә ул аҙағы үҙе өсөн нимә менән барып бөтәрөн белмәгән аҙымға барғандыр, тим...

Ә мин иһә, бөгөн килеп, һәр быуат һайын тыуған еребеҙ, телебеҙ һәм динебеҙ өсөн үлемесле яуға күтәрелеп сығып, һуңғыһында танктарға ҡаршы һыбай килеш ҡылыс менән барған атай-олатайҙарыбыҙҙың кисерештәрен аңлаған кеүекмен. Әрмелә булһынмы, тормоштоң башҡа төрлө ҡапма-ҡаршылыҡлы һәм ҡатмарлы ваҡиғаларында минең кеүек хәлгә ҡалған бик күп милләттәштәремдең шундай саҡтағы кисерештәрен тыңлағанда ла бындай аңлауым тәрәнәйә бара. Дөрөҫ, хәҙерге прагматик заман күҙлегенән сығып, бындай фиҙакәрлекте һәм ҡаһарманлыҡты ахмаҡлыҡҡа һәм беркәтлылыҡҡа тинләүселәр ҙә бар. Ундайҙар хатта үҙебеҙҙең арала ла күп. ***Әммә беҙ, беҙ генә түгел, Рәсәй составында дәүләтле булған күп кенә халыҡтар, үҙҙәренең бөгөнгө йәшәйеше менән тарихтағы, бигерәк тә XX быуат башындағы башҡорт ҡаһарманлығына бурыслы. Әлегә донъя йәмәғәтселеге был хәҡиҡәтте аңлаған хәлдә лә, белмәмешкә һалыша. Әммә донъялар ҙа, кешеләрҙең фекере лә үҙгәреп тора: ваҡыт үткән һайын тарихи ваҡиғалар анығыраҡ төҫмөрләнә. Шул уҡ ваҡытта күп кенә башҡорт күтәрелештәренең беҙгә ҡаршы көстәр тарафынан ойошторолған провакация булғанын да онотмайыҡ, тием. Әммә нисек кенә булмаһын, милләтебеҙ ҡаһармандары һәр ваҡыт үҙ асылына тоғро ҡалған: үлемдән оят көслө, хурлыҡтан үлем артыҡ, тип иҫәпләгән һәм беҙгә хәҙергене бүләк иткән.***

Магнитогорск телестудияһында эшләгән саҡта ҡаланың "Магнитогорский рабочий" гәзитендә Александр Матросовтың Шакирйән Мөхәммәтйәнов булыуы хаҡында мәҡәлә баҫылғас, урыҫ милләтле хеҙмәттәшем: "Башҡорттар беҙҙең Матросовты ла үҙҙәренеке итергә тырыша", - тип дәғүәнән белдерҙе. Беҙ Фәтих Фазылов менән уға Рәүеф Насыровтың Матросов хаҡында яҙылған урыҫ телендәге китабын уҡыттыҡ. Китапта Мәскәүҙәге бойондороҡһоҙ экспертиза мәғлүмәттәре килтерелеп, унда Советтар Союзы Геройы Александр Матросовтың фотоһы менән Учалы районы Ҡунаҡбай ауылы егете Шакирйән Мөхәммәтйәновтың бер үк кеше булыуы хаҡында документаль раҫлама баҫылғайны. Хеҙмәттәш бындай дәлилде лә ҡабул итте һәм: "Амбразураға шул башҡорт ҡына ташлана ала инде ул", - тип әйтеп ҡуйҙы.

Шулай итеп, "Үлемдән оят көслө", "Хурлыҡтан үлем артыҡ" әйтемдәре үлем ҡурҡыныsы алдында баҙап ҡалыуҙы ғына ла аңлатмайҙыр, тим. Уның нигеҙендә үҙеңде ни өсөндөр, кем өсөндөр ҡорбан итергә, йәнеңде фиҙа ҡылырға әҙер булыу ҙа ята. Үлемдең арьяғында Хаҡ Тәғәлә алдындағы һынау ҙа бар бит әле. Ҡурҡаҡлыҡтың хурлығы, ояты, кем белә, бәлки шул һынауҙа асыҡланалыр. Хәҙерге заман өсөн яраҡлымы-түгелме, бындай тойғо беҙҙең ҡаныбыҙҙа йәшәй. Хәйер, мәшһүр шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич был тойғоҙ хаҡында үҙенең "Башҡортостан" шиғырында бик аныҡ итеп әйткән.

*Арыҫландар үҙ ерен*
*Залимдарҙан тапатмаҫ,*
*Таптаймын тип атлаһа,*
*Башҡорт ҡаны атлатмаҫ.*
*Ил өҫтөнә сапҡан яу*
*Башҡорт йәнен ҡаҡшатмаҫ,*
*Быҫраҡ табан аҫтында*
*Башҡорт намыҫы ятмаҫ...*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

✓ *Ҡаҙан ханлығы һәм башҡорттар Рәсәй дәүләтенә буйһонғанға тиклем, нәк Өфө ҡалаһы торған урында борон ун саҡрымға һуҙылған ҙур ҡала булған. Ул ҡаланың һуңғы хужаһы нуғай ханы Торахан булған.*



*АРҘАҠЛЫЛАРЫБЫҘ*

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ РУХИ ШАҺЫ...

## Зәйнулла ишан тураһында бер кәлимә

Шәйех Зәйнулла бин Хәбибулла Нәҡшбәнди дин әһеле остазы ғына түгел, уны беҙ шағир мөнәжәтсе лә итеп беләбеҙ. Беҙ йәш ваҡытта халыҡ араһында уның фәлсәфәүи вәғәздәрен, мөнәжәттәрен көйгә һалып, табындарҙа һөйләй һәм йырлай торғайнылар. Уны оло һәм кесе ҡарый, тип йөрөтөлгән Әүеш ауылы аҡһаҡалдары Нурислам һәм Әүбәкер көйгә үк һалып әйтер булған. Улар икеһе лә - Зәйнулла ишандың шәкерттәре. Олоһо - 1890, ә кесеһе 1896 йылғы самаһы. Кесеһе алтмышынсы йылдарҙан һуң әле тере ине.

Етмешенсе йылдар башында һабантуй мәжлесе ваҡытында өс туған апайымдан - йырсы, мандолинасы, дини ҡарашлы Ильясова Фәйхүнә Әүбәкир ҡыҙынан Зәйнулла ишандың әлегә бер ерҙә лә баҫылмаған оҙон ғына мөнәжәтенең бер өлөшөн яҙып алып ҡала алдым. Уны Фәйхүнә апай ниндәйҙер иҫке мөнәжәт көйөнә бик ағымлы, һағышлы итеп йырлаған ине.

*Мөнәжәттәр яҙа, яҙа,*
*Ҡәләм тоткан ҡулым талды.*
*Был илдәргә килмәҫ инем,*
*Ризыҡтарым мине тартты.*



Мөнәжәттең был өлөшөн, күрәһең, ишан 1873 йыл йәй айында Кострома өлкәһе Никольск ҡалаһына һөргөнгә килеп еткәс яҙғандыр, тип уйланыла.

Мөнәжәт тексын яҙып алып ҡала алмағанлыҡтан, нәмә бар, шуның менән дауам итергә мәжбүрмен. Мөнәжәттең килһе дүрт юллыҡтары хәтирәгә һәм кемгәлер рәхмәт йөҙөнән яҙылғанға оҡшай.

*Ҡунаҡ булдым өйөгөҙҙә,*
*Зекер әйттем түрегеҙҙә.*
*Иман нуры йөҙөгөҙҙә,*
*Якты булһын гүрегеҙ ҙә.*

*Был мәжлестәр мөбәрәк булһын,*
*Жәнебеҙ беҙҙең күбәләк булһын.*

*Жәнебеҙ беҙҙең күбәләк булып,*
*Тубый ағасына ҡунһын.*

*Сәхрәләрҙә бер ағас бар,*
*Ҡоштар ҡунһа тәсбих әйтә.*
*Мөхәммәт өммәте алға уҙһа,*
*Етмәйме шул дәүләт беҙгә.*

*Рәсүлулла бораҡтары -*
*Ҡара тояҡ аяҡтары.*
*Изге доғалар ҡылайыҡ,*
*Фани донъя ҡунаҡтары.*

Зәйнулла ишан ғүмере буйына кешеләргә хеҙмәт итә. Ауырыуҙарға дауа бирер, мохтаждарға ярҙам ҡылыр, йомошсоға йомошон йомошлар. Әммә уның халҡыбыҙға ҡалдырған иң ҙур мираҫы - мәғрифәтселек. Мәғрифәтселек тойғоһо уға Троицкиҙа Әхмәтшаһ бин Хәлиф әл Мәнгәрәй мәҙрәсәһендә һабаҡ алып, уны тамамлау тураһындағы таныҡлығын тотоп, хәҙерге Учалы районы Аҡҡужа ауылына имам-хатип булып ҡайтҡас уҡ тоҡана.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**(Дауамы. Башы 29-32-се һандарҙа).**

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# НУҒАЙ ХАНЫ ТОРАХАН



**XVIII - XIX быуат рус ғалимдары үҙҙәренең хеҙмәттәрендә баш ҡалабыҙ Өфө тураһында байтаҡ ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерә. Шул ғалимдарҙың береһе - күренекле рус тарихсыһы, географы, иҡтисадсы һәм этнографы Петр Иванович Рычков (1712 - 1777).**

П.И. Рычков Башҡортостанға 1734 йылда Ырымбур экспедицияһы составында бухгалтер булараҡ килә. Һуңғараҡ ул Ырымбур губернаһының ҙур чиновниктарының береһе булып китә. Әшенән буш ваҡытта Рычков киң ғилми тикшеренеүҙәр алып бара: уның күп һанлы мәҡәләләре Рәсәйҙең төп фәнни журналдарында донъя күрә. Уңышлы ғилми эшмәкәрлеге өсөн Петр Иванович Рычков 1759 йылда Петербург Фәндәр академияһының беренсе ағза-корреспонденты итеп һайлана, ә 1765 йылда Иректе иҡтисад йәмғиәтенең (Вольное экономическое общество) ағзаһы булып тора.

Өфө ҡалаһы тураһында П.И. Рычков үҙенең "Ырымбур тарихы" ("История Оренбургская", 1759) һәм "Ырымбур губернаһы топографияһы" ("Топография Оренбургской губернии", 1762) тигән иң билдәле хеҙмәттәрендә яҙып китә. Әгәр автор "Ырымбур тарихы"нда Өфө тураһында ҡыҫҡаса ғына мәғлүмәт килтерһә, "Ырымбур губернаһы топографияһы"нда Өфөгә айырым "О городе Уфе и о всей Уфимской провинции" тигән бүлек бағышлай.

Ул бүлектә Рычков былай тип яҙа: "Өфө ҡалаһы батша һәм бөйөк кенәз Иоанн Васильевич ваҡытында һалынған... Ул ҡала Ағиҙел йылғаһы ағышының уң яғында урынлашҡан... Өфө исеменә ҡарағанда, шуны төшөнөп була: был исем яңы ҡушылмаған, ә боронғо атаманы ҡабатлай, был ерҙә элек йәшәгән нуғай хандары ҡалаһының исеме лә шулай (Өфө - **А.П.**) булған".



*Өфөнөң һүрәте (П.И. Рычков уны 1744 йылда ҡәләм менән төшөргән).*

П.И. Рычков Нуғай юлының Ҡаратабын улысы башҡорт старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаев менән осраша. Муллаҡаев Рычковҡа Башҡортостан, башҡорттар тарихы тураһында һөйләй. Һәм был мәғлүмәттәрҙе П.И. Рычков "Ырымбур губернаһы топографияһы"на, Өфөгә бағышланған бүлеккә индерә: "Атаҡлы башҡорт старшинаһы... Ҡыҙрас Муллаҡаев шуны белдерҙе: Ҡаҙан ханлығы һәм башҡорттар Рәсәй дәүләтенә буйһонғанға тиклем, нәк Өфө ҡалаһы торған урында борон ун саҡрымға һуҙылған ҙур ҡала булған. Ул ҡаланың һуңғы хужаһы нуғай ханы Торахан булған. Торахан ҡалала ҡыш көнө генә йәшәгән, ә йәй көндәрендә Өфөнән 50 саҡырым самаһы алыҫлыҡта - Дим буйында көн иткән... Торахандың ҡул аҫтында нуғайҙар һәм ун ике мендәр улысы башҡорттары була".

П.И. Рычков Өфөнө уратып алған тәбиғәт, ҡалала йәшәгән халыҡтар, ундағы соборҙар, ҡаланы һаҡлау ҡоролмалары тураһында ла әйтеп үтә. Шулай уҡ был бүлектә Бөрө, Минзәлә ҡалалары һәм улар тирәһендәге нығытмаларҙы ла тасуирлай.

Әйтергә кәрәк, П.И. Рычковтың "Ырымбур тарихы" һәм "Ырымбур губернаһы топографияһы" хеҙмәттәре бөгөн дә әһәмиәтен юғалтмаған. Шуға күрә Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Этнологик тикшеренеүҙәр үҙәге был китаптарҙы - "Ырымбур топографияһы"н - 1999, "Ырымбур тарихы"н 2000 йылдарҙа - аңлатмалар менән нәшер итте.

Шулай итеп, Петербург Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты Петр Иванович Рычковтың ғилми хеҙмәттәре лә Өфө тарихын рус дәүерe менән генә сикләмәй, ә унда борондан ошо уҡ исемле Өфө ҡалаһы булған тип иҫбатлай.

**Айбулат ПСӘНЧИН,**
**география фәндәре докторы, профессор.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

XX быуаттың беренсе ун йыллығында башҡорттар бары тик ыласын һәм ҡарсыға менән һәм бары тик ҡыр өйрәктәренә һәм ҡыр ҡаҙҙарына ғына һунар иткән. Бөркөттәрҙе тотһалар ҙа, һунарға сығмағандар һәм уларҙы ҡаҙаҡтарға һатҡандар. Ҡоштарҙы өйрәтеү, ыласын булһынмы ул, ҡарсығамы, һунарсының тәүге саҡырыуынан уҡ уның ҡулына килеп ултырыуҙан ғибәрәт булған. Бының өсөн уға бер нисә көн дауамында ашарға ла, эсергә лә бирмәй ас тотҡандар. Арыҡланған ҡошто һунарсы һул ҡулына ултыртҡан да, уң ҡулы менән уға аҙлап ит биргән. Бер үк ваҡытта махсус саҡырыу өнөн (ҡу-уух) әйткән.

Ҡулдан ашатыу ҡош үҙенең хәле менән тулыһынса килешкәнгә тиклем дауам иткән. Һуңынан һунарсы уны тәүҙә яҡын аранан осоп килеп ҡулына ултырырға мәжбүр иткән. Йәйләп ара йыраҡлаша барған. Алдатҡыс сифатында ул ит киҫәге тотҡан, һуңынан уны ҡоштарҙы алдау өсөн эшләнгән махсус шаҡылдатҡыс йәки һыҙғыртҡыс менән алмаштырған. Ыласынды өйрәтеү барышында беренсе тәүләктә башҡорттар уны арытырға, ял итергә ваҡыт бирмәҫкә була бер минутка ла ҡулдарынан төшөрмәгән. Ҡош тамам ҡулға эйәләшеп, беренсе саҡырыуға уҡ килеп етә икән, шул ваҡытта ғына уны һунарға алып сыҡҡандар.

Аусы ҡоштоң аяғына ҡыҫҡа ғына ҡайыш, тышау кейҙерелеп, оҙон арҡан менән арҡанланып ҡуйылған. Аусы ҡоштар менән һунар итеү процесы ҡатмарлы булмаған. Иртә таңдан йәки кисен ҡояш байыр алдынан аусы ҡоштары булған бер төркөм күл йәки һаҙлыҡ эргәһенә йүнәлгән. Һыу сығанағында өйрәк йәки ҡыр ҡаҙҙарын күреп ҡалһалар, бер нисә ыласынды осороп ебәргәндәр ҙә, үҙҙәре һай-һайлап шунда ҡарай сапҡан. Һирәк кенә һыбайлылар үҙҙәре менән эттәрҙе лә алған, улар үҙ сиратында күлгә йәки һаҙға инеп, ҡоштарҙы ҡурҡытҡан. Һауаға күтәрелгән ҡоштар артынан тағы бер ыласын осоролған. Ул ҡоштар тубын бейеккәрәк күтәргән. Шуны ғына көтөп торған һәм алдан ебәрелгән ыласындар тупты ҡыуып тотоп, уларға өҫтән таш кеүек ташланып, тәпәйҙәренең артҡы тырнаҡтары менән бәреп төшөргән. Бер-ике өйрәкте үлтергәс, ыласын үҙенең ҡорбаны эргәһенә төшкән һәм уның баш һөйәген ватып, мейеһен эскән. XX быуат башына инде ыласын һунары тулыһынса тиерлек юҡҡа сыҡҡан.

**XVII-XVIII быуаттарҙа башҡорттарға балыҡсылыҡтың камиллашҡан балыҡ тотоу ҡоралдары ҡулланылған барлыҡ төп ысулдары ла билдәле булған.** Был ҡоралдар менән арендаторҙар ғына түгел, башҡорттар үҙҙәре лә файҙаланған. Улар балыҡты һалдау, йылтырма, йылғаның йәки күлдең айырым участкаларын быуып ҡуйып, ҡармаҡ һ.б. ысулдар менән тотҡандар.

Башҡорттарҙа балыҡты **келә** менән тотоу йыш ҡуҙәтелә. Келәнең иң ябайы булып **һеүән** тора. Ул йылғаны быуып тороусы һәм түбәһе менән йылғаның ағымына ҡарап торған ситәндә ҡоуҙәләндерә. Балыҡ йылға үренә үрләгәндә ошо ситәнгә тулған һәм балыҡсылар уларҙы сак менән һөҙөп алған. Ситәндең икенсе ҡоролмаһы **нәрәтә** тип аталған һәм уны бик йыш тау йылғаларында күрергә мөмкин булған **(һүрәт)**.



Аҡмай яткан һыу сығанаҡтарында, күлдәрҙә һәм быуаларҙа нәрәтә урынына **ыйсуҡ** (котцы) ҡуйылған **(һүрәт)**. Башҡорттарҙа мурҙаның төрлө төрҙәре булған: **талдан үрелгән мурҙа, нәрәтә, йоп битәл.**



**(Дауамы бар).**

***✓ Өфө урамдары буйлап барғанда ҡараш ирекһеҙҙән бағаналарҙы, биналар ҡабырғаларын, ус аяһындай, һуңғы осорҙа хатта эш форматы булған тотошлай бер бит ҙурлығындағы төрлө төҫтәге иғландарға туҡтала.***

# ҠОЛЛОҠҠА ТӨШӘ КҮРМӘГЕҘ!

**30 июлдә Бөтә донъя кеше менән сауҙа итеүгә ҡаршы көрәш көнө билдәләнде. Нисек кенә сәйер тойолмаһын, хәҙерге заманда ла кешене ирекһеҙләп эшләтеү, хатта ҡоллоҡта тотоу осраҡтары бар әле.**




## Кеше энә түгел, тиһәләр ҙә…

Быйыл Кемерово өлкәһенең Новокузнецк ҡалаһында 9 кешене ҡоллоҡтан ҡотҡарыу тураһында яҙҙы киң мәғлүмәт саралары. "Кол биләүсе" Рәсәйгә элекке союз республикаларының береһенән килеп төпләнгән булған. Ростов өлкәһенең Батайск ҡалаһында ауыл хужалығы баҫыуҙарында бушлай эшләргә мәжбүр булған 14 кешене хоҡуҡ органдары хеҙмәткәрҙәренең азат итеүе хаҡында ла хәбәр иттеләр. Улар тейешле шарттары булмаған торлаҡта йәшәгән, ауыр физик эштән башҡаны күрмәгән.

Мордовияла тыуып үҫкән Сергей Шабуновтың тарихы айырыуса тетрәндергес. Ир 12 йыл ҡоллоҡта була. Тәүҙә уны ашау хаҡына Дағстандың Каспийск ҡалаһында кирбес заводында эшләргә мәжбүр итәләр. Артабан автомобиль йыуыу урынында тоталар, ә һуңынан ул Ставрополь крайының Барсуковский утарында мал ҡарай. Йылытылмаған бүлмәлә йәшәй, тиҙ әҙерләнә торған туҡмас менән генә туҡлана. Ул ғына ла булмай, хужа кеше ирҙе йыш ҡына туҡмай, шул рәүешле ихтыярын баҫа, үҙенә буйһонорға мәжбүр итә.

"Лиза Алерт" эҙләү-ҡотҡарыу отряды мәғлүмәттәре буйынса, илдә йыл һайын сама менән 180 мең кеше юғала. Шуларҙың 28 меңгә яҡыны табылмай. Бәхетһеҙ осраҡҡа эләгеүселәрҙең бер өлөшө "хеҙмәт йорттары" ("работные дома") тип аталған урынға эләгә.

## Һуҡыр бер тин хаҡына

Эшмәкәрлеге юғалған кешеләрҙе эҙләүгә ҡоролған "Альтернатива" ирекмәндәр хәрәкәте "хеҙмәт йорттары"н өс төркөмгә бүлә. Тәүгеләре, ысын йөҙөн йәшереп, реабилитация үҙәктәре һәм хәйриә структуралары исеме менән йөрөй, хатта дәүләт гранты ярҙамы менән файҙалана. Икенселәре - дини ойошмалар аҫҡан йорттар. Унда община менән йәшәйҙәр, эшләп тапҡан аҡсаны хеҙмәткә ярамһыҙ ололарҙы, гәриптәрҙе ҡарау өсөн тотоналар. Өсөнсөләре иһә асыҡтан-асыҡ "хеҙмәт йорттары" булып йөрөй, улар йәшерен дә, рәсми ҙә эшләүе ихтимал. Ундай йортҡа барып юлыҡҡан кешеләрҙе, күпселек осраҡта, ашау хаҡына эшләргә мәжбүр итәләр, документтарын, телефондарын тартып алалар, тышҡы донъя менән бәйләнештәрен сикләйҙәр. Бындай йортта бер кеше хужаһына ай һайын 60-80 мең һум саф табыш килтерә, тип баһалай эксперттар. Шуға хеҙмәткә ярамһыҙ асарбаҡтар ундай урынға эләгә алмай.

"Хеҙмәт йорттары" бөгөнгө көндә Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәрендә лә асылған. Йыш ҡына уларҙың эшмәкәрлегенә хоҡуҡ һаҡлау органдары бармаҡ аша ҡарай. Сөнки, документтар буйынса, кеше, килешеү төҙөп, "үҙ ризалығы" менән унда йәшәй. Шуға ла "хеҙмәт йорттары" бер нәмәнән дә тартынмай үҙҙәрен киң рекламалай.

Өфө урамдары буйлап барғанда ҡараш ирекһеҙҙән бағаналарҙы, биналар ҡабырғаларын, хатта һәленеп торған ағас ботаҡтарын сыбарлаған ус аяһындай, һуңғы осорҙа хатта эш форматы булған тотошлай бер бит ҙурлығындағы төрлө төҫтәге иғландарға туҡтала. "Ауыр тормош хәлендә юлыҡтығыҙмы? Йәшәргә урынығыҙ юҡмы? Шылтыратығыҙ! Беҙ эш, йәшәү урыны бирәбеҙ, ашатабыҙ. Көнөнә түләү - 1500 һумдан. Телефон номерҙары..." "Наркотик һәм алкоголь йоғонтоһондағы кешеләргә, асарбаҡтарға ярҙам..." "Кешеләргә ярҙам! Торлаҡ, көнөнә 3 тапҡыр туҡланыу, тәүге көндән үк эш хаҡы түләнә..." Сама менән ошондай бер эстәлекле улар. Шуға иғтибар иттем: һуңғы өс йыл тирәһендә "хеҙмәт йорттары"на саҡырған урам рекламаһы бермә-бер артты. Мәҡәлә әҙерләгәндә уларҙа күрһәтелгән бер нисә номерға шылтыраттым, йәнәһе лә, ғаиләһенән киткән ир туғаныма ваҡытлыса баш терәр урын кәрәк.

Иң тәүҙә, һеҙ ҡайһы ҡаланан, тип һорашылар. Шулай итеп, әңгәмә башында уҡ телефондан һөйләшкән кешенең Өфөнән булмауын аңланым. Тимәк, "хеҙмәт йорттары", сумермаркет магазиндары кеүек үк, ил буйлап селтәр рәүешендә таралған һәм ойошороу, эшен яйлау үҙәктәре ҡайҙалыр ситтә урынлашҡан.

"Эйе, туғаныбыҙҙы ҡабул итә алабыҙ. Өфөлә булғас, шул-шул адрес буйынса килә ала. Тик беҙ - хәйриә ойошмаһы түгел, бөтә сығымдарҙы эшләп ҡапларға тейеш. Хеҙмәт хаҡын көндөкөн көнөнә түләп барабыҙ. Үҙ аҡсаһын үҙе иркен тотона ала, тик эсеү ҡәтғи тыйыла. Килешеү төҙәлә, бөтәһе лә законға ярашлы", - тип эске тәртип менән таныштырҙылар. Шарттар һәм талаптар "хеҙмәт йорттары"ның һәр ҡайһынында ла сама менән бер үк икән.

Рәсәй ҡануниәтендә "хеҙмәт йорттары" тигән төшөнсә юҡ. Тимәк, был өлкә закондар кимәлендә көйләнмәгән. Кешенең унда ниндәй юлдар менән барып эләгеүен, көсләп тотоу-тотмауҙарын асыҡлауы бик ауыр, тип белдерә "Альтернатива" әүҙемселәре. Шик тыуған, ялыу килгән осраҡта ла хоҡуҡ һаҡлау органдары вәкилдәрен "хеҙмәт йорттары"нда тейешле документтар менән ҡаршы алалар, закондарҙы боҙмауҙарын еңел иҫбатлайҙар. Йәнәһе лә, бер кемде лә ирекһеҙләмәйҙәр, йорттағы һәр кем ике яҡлы килешеү буйынса йәшәй, эшләй. Теләнә ниндәй ҡағыҙға Рәсәй кешеһе уҡып та тормайынса ҡул ҡуя, ғәҙәттә. Был йәһәттән социаль һикәлтәнең иң түбәнге баҫҡысын биләгән төркөм тураһында ни әйтмәк. Шуға паспортын, башҡа шәхси документтарын, кеҫә телефонын хужаға тапшырыуға, ҡаты штраф системаһына бер һүҙһеҙ риза булыуҙарына, ҡарап та тормайынса килешеүгә имза һалыуҙарына аптырайһы түгел. Ә документтарҙы, телефонды кире ҡайтарып алыуы бик ауыр. "Альтернатива" хәрәкәте әүҙемселәре белдереүенсә, мәжбүрләп тотолған бер ир бының өсөн ике аҙна бушлай эшләргә мәжбүр була.

## Яңылыш юлдан китеп…

Етенсе тиҫтәһен ваҡлаған, хаҡлы ялға сығып, хәленән килгәнсе балаларына, туғандарына ярҙамлашып һәүетемсә генә йәшәп ятҡанда шундай мажараға тарырын Мораҙым яман төшөндә лә күрмәгәндер. Ир өсөн был күңелһеҙ ваҡиға бәхетле тамамланғанға ғына уны "мажара" тип әйтеп була, әлбиттә.

Мораҙым, ялға йыйынған туғанының дачаһын ҡарап тороу өсөн, Мәскәүгә юллана. Өфө аэропортынан Шереметьевоға барып төшә. Тик яҡындары, кисектергеһеҙ йомоштары килеп сығыу сәбәпле, уны ҡаршылай алмай. Ниндәй транспорт менән, нисек, ҡайҙа барырға - һәр аҙымын тәфсирләп яҙып ебәрһәләр ҙә, олаталарын көтөп ала алмай улар. Ғүмере ауылда үткән Мораҙым ҡырмыҫҡа иләүендәй ҡайнап торған аэропортта баҙап ҡала. Башы буталып, электричка урынына автобусҡа ултыра һәм, Мәскәүгә етмәй, Долгопрудный ҡалаһында төшөп ҡала. Яңылыш юлдан киткәнен аңлаған ир, болоҡһоп киткән күңелен баҫыр өсөндөр инде, аҙмы-күпме төшөрөп ала. Уйламай эшләгән ошо аҙымы, сәфәрҙә тик айыҡ баш менән генә йөрөү кәрәклеген онотоу, уның хәлен тағы ла ҡыҫкенләштерә. Юлында тап булған күлдә һуҡмыш килеш һыу төшә һәм шунда документтары менән костюмын онотоп ҡалдырып китә.

Нисек тә эргәлә генә ятҡан Мәскәүгә етә Мораҙым. Полиция участкаһына инеп, хәлен һөйләй, тик аңлау тапмай. Аҙна буйы баш ҡала буйлап йөрөй, кеше ҡалдығы менән туҡлана, урамда йоҡлай, аслы-туҡлы асарбаҡ тормошонан нык ябығып китә. Барып тапҡанда ул шикле кешеләр ҡарауы аҫтында фатир ремонтлаусылар менән эшләп йөрөгән була.

Юғалған ирҙе балалары, туғандары эҙләй башлай, Мәскәүҙә йәшәгән ауылдаштарына мөрәжәғәт итәләр. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында баш ҡалаға барып төпләнгән, үҙ эшен асып, унышлы кәсеп иткән Фәһим исемле уҙаман, эргәһендә тупланған яҡташтары менән Мораҙымдың эҙенә төшә һәм уны ҡотҡара. Детектив әҫәр сюжетына торорҙай эш атҡарып сыға егеттәр.

Тәфтиш органдарында эшләгән белештәре Долгопрудныйҙа полиция Мораҙымдың документтарын тапҡанын, уның бер нисә урында видеокамераға эләккәнен белә. Яҡташтарының "Ҡаҙан" метро станцияһы тирәһендә йөрөгәнен асыҡлағас, өс вокзал майҙанын (Ҡаҙан, Ярослав, Ленинград вокзалдары) төйәкләгән асарбаҡ-

**✓ Замана ҡолдары рәтен иң элек эскеселәр һәм асарбаҡтар тулыландыра. Хатта социаль үҙәктә реабилитация үткәс тә, асарбаҡтарҙың байтағы ғәҙәти йәшәү рәүешенә, урамға, кире ҡайта.**



тар араһында аҙна буйы Мораҙым тураһында белешеп йөрөйҙәр. Тик был һөҙөмтә бирмәй. Мораҙымдың йөҙә баш ҡаланың берҙәм видеокүҙәтеү системаһына бер нисә тапҡыр эләккән йорт тирәһен байҡарға булалар. Йорт янында байтаҡ йөрөйҙәр. Ҡайҙа ремонт барғанын асыҡларға тырышалар. Тауыш килгән подъезға инә егеттәрҙең береһе, ә иптәше машинала ҡала. Өҫкө ҡатҡа күтәрелә. Ярым-асыҡ ишектән эскә күҙ һалһа, Мораҙым тора. Инә һалып, яҡташын етәкләп ала ла сығыу яғына ыңғайлай. Шул мәл юлын мыҡты кәүҙәле ир быуа: "Кайҙа ашығаһың былай?" - тип ҡаршы килә башлай. Әмәлгә ҡалғандай, күрше фатир ишеге асыла. Шунан файҙаланып, ирҙәр тышҡа уктала һәм, машинаға ултырып, хәйерһеҙ йорт тирәһенән тиҙерәк китеү яғын ҡарайҙар.

Мораҙым ныҡ йонсоу ҡиәфәттә, битараф кәйефтә була, башынан үткән ваҡиғаларҙы бөтөнләй хәтерләмәүе асыҡлана. "Ашаттылар, документтар алып бирергәярҙам итәбеҙ, тинеләр", - ти бер ҡатлылыҡ менән. Уны ҡоллоҡтан ҡотҡарған ауылдаштары, психотроп таблеткалар менән аңын баҫҡандарҙыр, тигән һығымтаға килә. Долгопрудныйҙан Мораҙымдың документтарын барып алалар һәм самолет менән уны тыуған яғына оҙаталар.

### Бәлә башы - эскелек

Мораҙым, яңылыш автобусҡа ултырып китһә лә, әгәр араҡы эсмәһә, бәләгә тарымаҫ ине. Эскелек кешене ауыр хәл алдына алып килеп баҫтырған тағы бер хикәйәт.

Аҙна буйы ятып эскән Юлай, ниһәйәт, айныға. Артабан йәшәп китергә кәрәк. Тик нисек? Ҡатынын, балаларын ҡалдырып, йортон ташлап сығып киткән яңғыҙаҡ ир ул. Барыһы ла үҙ иркендә, иңендә ғаилә йөгө, донъя мәшәҡәттәре ятмай. Урамда "Араҡы һәм наркотиктан яфаланғандарға ярҙам. Бушлай" тигән яҙыу иғтибарын йәлеп итә. Тота ла, унда күрһәтелгән телефон һандарын йыя.

Теге яҡ остан уны яғымлы сәләмләйҙәр. Ентекләп һорашҡас, үҙҙәре өсөн әҙер "килент" икәнен аңлайҙар, күрәһең, ҡайһы тирәлә ултырғанын белешәләр ҙә, урындан ҡуҙғалмай шунда көтөргә ҡушалар. Күп тә үтмәй, шәп машинала йәш егет килеп етә. Бик итәғәтле һөйләшә, ҡайҙа, нисек барырға кәрәклеген өйрәтә, юллыҡ аҡса бирә. Һөҙөмтәлә Юлай ҡала ситендәге бер йортҡа барып эләгә.

Ашханала уға араҡы ҡойоп бирәләр, ашаталар һәм, әлбиттә, телефонын, паспортын, тәртип шулай, тип һалдырып алалар. Иртәгеһенә баш ҡала эргәһендәге бер ҡасабаға эшкә алып китәләр. Башҡалар менән йорт нигеҙе ҡаҙый. Кискә кире алып ҡайталар. Бер бүлмәлә тимер карауаттарҙа 7-8 ир йоҡлап йөрөй. Тәртип ҡаты була, йәшәгән йорт алдында ғына йөрөргә рөхсәт итәләр, урамға сығармайҙар.

Бер аҙна тирәһе шулай йөрөгәс, ныҡлап айныған Юлай ҡайҙа килеп эләгеүен аңлай һәм был тоҡконлоҡтан ҡотолоу юлдарын эҙләй башлай. Бер көн, элекке эш урыныма шылтыратам, көтмәһендәр, әтеү юғалтҡандарҙыр, тип хәйләләп, телефонын һорай. Уны ҡулына алғас, йәһәтләп улының номерын йыя. Ҡайҙа икәнлеген, ниндәй хәлгә тарығанын башҡортсалап уға тиҙ генә аңлата. Телефонды кире бирә, тик уны һүндермәгән булған икән. Улы Антон исемле "хеҙмәт йорто" караусыһы менән һөйләшеп китә. Һеҙ кем, атайымды ни сәбәпле тотаһығыҙ, эшләткән өсөн түләйһегеҙме, тип һораша башлай. Беҙ уны көсләп тотмайбыҙ, килеп ала алаһығыҙ, ти бындай һөйләшеүҙе көтмәгән Антон. "Бында икәнендә бер кем белергә тейеш түгел ине. Беҙгә тормоштан, туғандарынан ваз кискән кешеләр килеп һыйына. Бүтән килеп ҡапма", - тип оҙатып ҡала ул Юлайҙы. Тоҡконлоҡтан аңһат ҡотолғанына ныҡ шатлана ир. "Бәлки, кемгәләр яҡшы урындыр ул. Хеҙмәтенә түләмәһәләр ҙә, ашаталар, йәшәтәләр. Ҡайһы саҡ кеше шуға ла үтә мохтаж бит", - ти Юлай, башынан үткәндәргә айыҡ аҡыл менән байҡап.

### Баш терәр урын бар ҙа...

Замана ҡолдары рәтен иң элек эскеселәр һәм асарбаҡтар тулыландыра. Күп осраҡта кеше тәүҙә эсә башлай, шунан урамда ҡала. Белгестәр быны дөрт төп осраҡ менән аңлата. Тәү сиратта, элекке тоҡкондарҙы үҙ торлаҡтарынан сығарып, һуңынан уны һатыу. Икенсе мәл - эскелек һәм ғаиләләрҙең тарҡалыуы. Шулай уҡ урамда ҡара риэлторҙарҙың ҡорбандары тороп ҡала. Йыш ҡына быға ата-әсәләр һәм балалар араһындағы низағ та сәбәпсе була. Ҡағыҙ булараҡ, алты айҙан ашыу урамда йәшәгән кешене кире ҡәҙимге тормошҡа ҡайтарыуы бик ауыр. Улар донъянан ваз кисә һәм бер нәмәне лә үҙгәртергә теләмәй. Күбеһе бындай йәшәүҙе үҙенсәлекле азатлыҡ тип тә ҡабул итә. Хатта социаль үҙәктә реабилитация үткәс тә, асарбаҡтарҙың байтағы ғәҙәти йәшәү рәүешенә, урамға, кире ҡайта. Янынан эсә башлайҙар, документтарын юғалталар һәм яман уйлы әҙәмдәрҙең енел ҡорбанына әүереләләр.

***Өфөлә йортһоҙҙар өсөн ике приют эшләй. Береһе, республикаға ҡарағаны, 39 урынлы. Ул Колгуевский урамы, 29-се йорт адресы буйынса урынлашҡан. Икенсеһе, Шаҡша биҫтәһендәге, ҡаланыҡы. Унда 25 урын бар. Шул уҡ ваҡытта, рәсми сығанаҡтарҙан билдәле булыуынса, Өфөлә сама менән өс меңгә яҡын йортһоҙ иҫәпләнә.*** Әлбиттә, урындар ҡайһылай аҙ, тигән уй килә башҡа иң элек. Әгәр, үрҙә әйтелгәнсә, бындай учреждениеларҙың үҙенсәлекле контингент менән эшләүен иҫәпкә алһаҡ, бәлки, ошо ла тамамдыр.

Реабилитация үҙеге өсөн бик күп инструкциялар һәм сикләүҙәр индерелгән. Норматив документтарҙа, мәсәлән, бүлмәлә күпме кеше йәшәргә тейеш, баҫҡыстарҙың киңлеге һәм ҡулйыуғыстың бейеклегенә тиклем ҡаты талаптар билдәләнгән. Бынан тыш, ундай учреждениеға махсус белемле һәм тәжрибәле персонал кәрәк. Приютҡа инеү өсөн асарбаҡтар инфекцияға анализ тапшырырға, флюорография үтергә тейеш. Ошолай ҡатмарлаштырыу ҙа, әлбиттә, ниндәйҙер кимәлдә кире эҙемтәләргә килтерә, ирекле урам тормошона күнеккән йортһоҙҙарҙы үҙенән өркөтә. "Хеҙмәт йорттары"нда инә бер ниндәй ҙә сикләүҙәр юҡ. Бараһың да - йәшәп алаһың да китәһең, тик кәрәк тота алырлыҡ хәлең генә булһын. Тимәк, улар конкуренция йәһәтенән өҫтөнөрәк тора. Тағы ла шуны әйтергә кәрәк: "хеҙмәт йорттары" - эшҡыуарҙар өсөн ҡапыл кәрәк булғанда ҡыҫҡа ваҡытҡа йәлеп итеү өсөн эшсе көс сығанағы ул. Эшкә урынлаштырмай, хеҙмәтте һаҡлау мәсьәләләре менән башты ҡатырмай ғына физик көс талап ителгән ҡара эште еренә еткереп ҡуйыу улар өсөн бик уңайлы. Йәғни, "хеҙмәт йорттары"на һорау бар.

Тимәк, әгәр эшмәкәрлектәре закондарға ярашлы көйләнмәһә, күҙәтеү органдарының тейешенсә контроленән ситтә торһа, улар артабан да сетерекле һорауҙар тыуҙырған, ауыр хәлдә ҡалған яҡлауһыҙ кешеләр өсөн хәүефле урын булып ҡаласаҡ. Урамдар йөҙөн йәмһеҙләгән иғландарҙан да Өфө әле оҙаҡ арына алмаҫ, күрәһең.

**Байгилде МОТАЛЛАП.**

*БЕР КӘЛИМӘЛӘР*

## МАТУРЛЫҠ - ҮҘЕ БАТЫРЛЫҠ!

**Тел һәр ҡайҙа күркәм булһын, әйтелгәнең тәғәйен кешеһенән дә бигерәк телдең үҙен күтәрһен, байытһын, ихтирам-иғтибарҙы арттырһын.**

Шулай тигәндә, сөсө теллеләнеүҙе күҙҙә тотмайым һис, ҡыҫҡа ғына, ипле генә әйтеү-яҙыуға баҫым яһайым. Ошо йәһәттән бөгөн айырыуса социаль селтәрҙәр мөһим. Сатай-ботайлыҡ, мәғәнәһеҙлек, шыр хаталыҡ араһында һәйбәт кенә теҡсҡа юлыҡҡанда, ботаҡтар йыйып алынмаған ағас ҡырҡҡан урындан таҙа сабынлыҡҡа барып сыҡҡан ише, иҫ киткес рәхәтлек кисерелә.

Комментарийҙарға ла ҡағыла был, унда ла бер төрлөлөктән ситләшергә ине. Бер рәүеш ҡотлауҙарҙан арынылһасы. Уйлап ултырыу ваҡытты ала, башты ауырттыра, маңлай һырын ишәйтә, аңлайым, ләкин юҡ-бар менән тултырғансы, яҙмай ғына ултыр.

Иҫ киткес һылыу ҡатын йылға буйында төшкән һүрәтен һалған. Тәбиғи, ҡыланыуһыҙ һүрәт. Уны электән беләм, һәр хәрәкәте килешеп тора. Нимә яҙырға?

- Матурлыҡ - үҙе бер батырлыҡ! - тинем. - Әллә мәҡәл тыуҙы инде... - тип өҫтәнем артабан.

## СТИКЕР ҺӘМ СПИКЕР

**Социаль селтәрҙәрҙә төрлө асылмалар һалыу йышайҙы. Әҙерҙе ни...**

Шулайтып ҡыялғансы, үҙ ҡулы менән:

- Ҡотлайым! - тип кенә яҙһа, ҡана ла бит, юҡ шул. Әллә боронғолоҡ ҡалдығы һанала, әллә нимә.

Кеше яһаған, тегендә-бында йөрөй торғас, осһоҙайып бөткән, һин мең күргәнде беркетеп ултырыу бар. Стикер ебәргәнсе, спикер ебәрһәсе, тип уйлап ҡуйыла. Радиолағы тапшырыуҙар өсөн телде лә, предметты ла яҡшы белгән аңғәмәсегә ишаралайым - инглиздәге спикер "һөйләүсе" тип тәржемәләнә бит.

Ниндәйҙер ваҡытлыса ойошторолған төркөмдәрҙә лә эшлекле тәҡдимдәр, мәғлүмәт урынына шулай иртә менән төҫһөҙ тәбрикләүҙәр, кис һайын тыныс йоҡо теләүҙәр ишәйә лә китә. Әйтеп тә ҡарағаным булды, аңлау тапманым. Ә бит мәсьәлә бик мөһим: әҙәбиәтте, хәбәриәтте, башҡа ижади өлкәләрҙе деталдәр байыҡтырғандай, уларҙы хатта яһағандай, был да телендә йә үҫтерә, йә үлтерә. Сөнки яйлап шулай аңға һеңә.

## ЯРАШЫУ ҺӘМ ЙӘРӘШЕҮ

**Бер үк хәрефтәр, хатта бер үк һүҙҙәр менән дә төрлөсә яҙып булғаны билдәле.**

Текст төҙөгән һәр кем ижадилыҡҡа ынтылғанда, ғәҙәтилектән әҙ генә булһа ла тайпылғанда иғтибарҙы шундуҡ йәлеп итә. Тапалған тәртиптәге, тыумаҫ борон юҡҡа сыҡҡан һөйләмдәр диҡҡәтһеҙ ҡала, урын ғына биләй.

Интернетта фото һалдым бер көн.

- Яман шәп егеттәр менән ултырҙаш булынды, - тиергә хәл ҡылдым.

"Ултырҙаш" һүҙе барлығы ла төшһөн иҫтәргә, тигән уйҙа инем. "Булдым" урынына "булынды" тип элек халҡыбыҙҙа бөгөнгөнән йышыраҡ ҡулланылған, башҡа төрки телдәрҙә әле лә мул ҡалған, өсөнсө зат ялғауын ҡуштым. Ә бына "яман шәп" тигәнем ҡабул ителерме икән? Һорауҙы ҡуймай ҙа булмай, сөнки яҙмаң ниндәй бөйөк булмаһын, ниндәйҙер ваҡ, сәнсеүле реплика түбән төшөрөп тә ҡуйыусан.

Күпселек аңланы.

- Хәтәр шәп! - тип эләктереп алғандар ҙа булды.

Әммә:

- Шәп булғас, нинә яман? - тине берәү барыбер ҙә.

- Һәр кем үҙ өлкәһендә көслә. Үҙең аңлап етмәгән урындарға ҡул һонмаһаңсы, - тип өҙгө килә лә бит, ләкин булмай. Сөнки һүҙ артынан һүҙ эйәрә - баяғы "белгес", шулай икән дә, белмәгәйнем, тип, ғәфү үтенмәй бит. Ә ысынында халҡыбыҙ ошолай һөйләшә, "яман матур" тип үк ебәрәбеҙ. Бер замандашым, шаяртып:

- Әшәке матур! - тип тә ҡуйғылай.

Һүҙ менән һүҙ яраша, хатта йәрәшә лә бит. Бында ла, хатта дөйөм мәғәнәләре ҡапма-ҡаршылар ҙа, ярашып алған да ана ниндәй бейеклек бирәләр.

"Килеп ултыра" менән "килә ята"ға ҡағылышлы комментарийҙар ҙа булды.

Ғөмүмән, тел ғилеменән ситтәгеләр:

- Нинә ятып килә? - тип ошоға йыш ҡаҙалыусан.

Әлеге ҡылымдарға ыңғай ҡарайым. Беренсенән, телгә бушҡа ғына инеп тороҡлоға әйләнмәгәндәр. Икенсенән, теүәл мәғәнә бирелә - процесс күҙ алдында асыҡ баҫа, ә "килә" тип кенә сикләнгәндә аныҡ ваҡыты билдәһеҙ киләсәк кенә аңлашыла.

## КҮРКӘМ ГЕНӘ

**Төрлө телдәрҙе ҡушып аралашҡанды маҡтағаным юҡ. Үҙ-ара һөйләшеү генәме, шул бутҡаны социаль селтәрҙәргә сығарыу бар, юғиһә.**

Ләкин ара-тирә башҡорт һүҙҙәрен аңлы рәүештә рус теленә лә индереп ебәреү, айырыуса ыңғай мәғәнәле һүҙҙәрҙе ҡулланыу - күркәм генә килеп сыға, минеңсә. Мәсәлән, "алға" ана нисек алға китте. "Матур"ҙың да мәғәнәһен хәҙер кем генә аңламай, сауҙаханалар тышында ла ул йыш осрай. Ошоно бер көн социаль селтәрҙәрҙең береһендә үҙемсә файҙаландым. Таныш гүзәл заттарҙың береһе ҡыҙҙары менән фотоға төшкән дә, русса инеш һүҙ менән сәхифәһенә һалған. "Матурально красивые", - тип яҙҙым аҫтына.

**Рәсүл СӘҒИТОВ,**
**хәбәрсе һәм яҙыусы,**
**Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

***✓ Иң һуңынан һүҙ сәйәсәткә күсте: "коммунизм" ваҡытында яҡшы инеме, әллә "демократия"ламы, Ленин һыҙған юл дөрөҫ булғанмы, Сталинды бөгөн клонлаштырһалар, донъя ҡай яҡҡа үҙгәрер ине.***






* * *

"Эврика!" Бала саҡтан күңелдәргә тылҡып һеңдерелгән был ят һүҙ Мотаһарҙыҡында шундуҡ башҡортсаға әйләнде: "Әһә, таптым бит, әй!"

Ул сәй эсеп ултырған еренән һикереп торҙо ла, өйҙәгеләрҙе аптыратып, иҙән уртаһында тыпырлап алды. "Тәки таптым!" Был "таптым"ы уны өй ишеген астырҙы, яптырҙы, картуф баҡсаһы яғына табан атлатты. Аҙбар артына сығып, баҡса осона еткәс, кәртәгә таяндырҙы. Күҙҙәрен соҡорҙоң арғы яғында урынлашҡан емерелгән колхоздың емерелгән фермаһы яғына баҡтырҙы. Ғәҙәтенсәге "әһә"гә "бар икән әле" тигән һүҙҙәр өҫтәлеп сыҡты Мотаһарҙың ирендәре аша.

Ошо уҡ кисте унын ҡапҡаһынан емерелгән колхоздың емерек фермаһы ҡыйығынан ҡалған шифер, таҡталарҙы тейәгән фермер Шамилдың "КамАЗ"ы үтте. Бушаттылар. Мәгәрисләнеләр...

Бушатҡан саҡта Мотаһарҙың һай-һайтлаған, дауайлаған, һаҡ эш итергә саҡырған тауышы әллә ҡайҙа яңғырап торҙо: әйҙә, Нәжми ишетһен, күңелен бесәйҙәй тырнаһын, көнсөллөгөн уятһын.

Ысынлап та, уйлауы раҫҡа килде: күршеһе ҡапҡаһы алдында фермер машинаһының тормозы сыйылдауы булды - Нәжми тәҙрәгә ҡапланды. Ҡапланды, тиһәң, бигүк дөрөҫ булмаҫ, әлбиттә, ә ҡорғандар артына боҫоп, әкрен генә күҙәтте: элекке "калхуз ҡарағы" тағы ни сәлдергән?!

"Колхоз ҡарағы" тигән ҡушамат (асылда, Нәжми генә уны шулай тип йөрөтә) Мотаһарға унын арҡыры ятҡанды үҙ яғына табан бороп һалғанынан "йәбешкән". Тик ятҡан тимер-томорҙо, торба, арматура, шуның һымаҡ ваҡ-төйәк эргәһенән тыныс ҡына үтә алманы шул уныһы: тракторына һала ла ҡайта торғайны колхоз заманында. Береһенән дә ҡурҡманы алдынғы механизатор. Шуға әле лә бит, булмаған колхоз мөлкәтен бүтәндәр һүтергә ҡурҡып торғанда ла, барҙы ла ферма ҡыйығының түрә-ғара, уларҙың ҡуштандарынан ҡалған нәмәләрен һүтте лә алып ҡайтты. Үҙ-үҙен аҡлар өсөн сәбәбен дә тапты: "башҡалар һүткәндә ниңә ҡарап ятырға тейешмен" йәки, русслап әйткәндә, "зачем добру пропадать?" Ысынлап та, ниңә булғанын серетеп ултыртырға?

Бына ошо "колхоз ҡарағы"н оҙаҡ ҡарап торҙо Нәжми тәҙрә, машина инеп киткәс, яңы һарайының быялаһы ҡуйылып өлгөрмәгән тәҙрәһе аша. Позиция хәрбиҙәрсә шәп ине: күршеләренең ни ҡылғаны күренеп, ишетелеп тора.

Мотаһарҙың һәр хәрәкәте Нәжмиҙең алҡымынан алды. Һәр һүҙе аҡырыныу-ҡысҡырыныу сарында үткерләгән бысаҡтай йөрәген телде. "Шамил, шиферҙы яңылыш ватып ҡуймайыҡ", "Шамил, шәп һаҡланған бит, әй, был шиферҙар. Колхоз таралыр алдынан ғына тракторға тейәп фермаға үҙем илткәйнем", "Таҡталары, таҡталары һуң, бөгөн пилорамдан сыҡҡандай".

"Таҡта. Ә, таҡта?!" Нәжми муйынын һуҙҙы, ҡолаҡтарын тырпайтты. Ысынлап та, таҡталар: киске ҡояштың һуңғы нурында төрлө төҫтәргә мансылып, шап та шоп төшәләр. Ах, таҡталар! Нәжметдин бит уларҙың һәр кубометрын өсәр, бишәр меңгә һатып алды! Ә был "колхоз ҡарағы-ы..." Ух-х...

Быныһы ғына нисауа булған икән. Саҡ төн уҙғарған, бар донъяны күрә алмаҫтай булып таң ҡаршылаған Нәжметдин "муллалар йәйәү йөрөй торған урын"ға ашығып сыҡһа-а... Ни күрһен, ҡояш ҡалҡырҡалҡмаҫтан уҡ Мотаһар картуф баҡсаһынан - ике аралағы межа буйлап килә. Эре-эре аҙымдар менән дүрт-биште атлай ҙа, туҡтап, ҡатыны ҡулынан ҡаҙыҡ ала. Туҡ-туҡ. Ҡағып ҡуйғас, тағы аҙымлай башлай.

Хәжәтен үтәй торған урындың ишеге ярығынан күҙен алмаған Нәжми өнһөҙ ҡалды: ике араға бағана ултыртып, кәртә тоторға йыйына бит был "ҡараҡ". Ғүмерҙә булмағанды, ата-олатайҙар күрмәгәнде...

Был көн Нәжметдин өсөн тамуҡтың туҡһан туғыҙ тәүлегенә тура килгәндер. Үҙ-үҙенә урын тапманы: йә ҡатыны ашын тоҙһоҙ бешергән, йә ике "шалапай"ы өйҙә ярҙамлашмай - уйнап тик йөрөй, бесәйе, сысҡан тотмайынса, гелән диванда ята, һыйыры көтөүҙән һуңлаған...

Ә Мотаһарҙа "туй" ине. Ысын мәғәнәһендә - туй! Ауылда эшһеҙ йөрөгән, аҙыраҡ һалғыларға ратҡан, буйҙаҡ ғүмер кисереүҙе артыҡ күргән, ҡатынынан айырылған барса ир-атты йыйған да өмә үткәрә. Таңдан ҡаҙыҡ ҡағылған урындарҙа ғүмер буйы "урлашып" йыйылған торба бағаналар ҡалҡа бара, аҫлыөҫлө икешәр кәртә араларын тоташтыра тора, һуңынан кистән генә ферма башынан һүтелгән шифер ҡағыла килә. Көтөү төшөр ваҡыт та етмәне, картуф баҡсаһы ғына түгел, йәшелсә баҡсаһы араһы ла томаланып бөттө. Һуңынан инде унлап мужиктан торған "хор" төнө буйы репертуарын һуҙҙы: кемдер йырлағандай итте, кемдер күкрәгенә һуғып, армияла "духтар"ҙы нисегерәк итеп ҡыуалауы, "дед"тарҙың иманын уҡытыуы тураһында шапырынды, кемгәләр мәрйәләр оҡшай икән, улар ҙа башҡорт егеттәрен үҙ итә, имеш... Иң һуңынан һүҙ сәйәсәткә күсте: "коммунизм" ваҡытында яҡшы инеме, әллә "демократия"ламы, Ленин һыҙған юл дөрөҫ булғанмы, Хрущевтың кукурузы ни тиклем уңыш биргән, Сталинды бөгөн клонлаштырһалар донъя ҡай яҡҡа үҙгәрер ине лә, ниңә беҙҙең өйҙәр емерелә, ә ҡайһы яҡталыр нисәмә быуат элек үк ауа башлаған башня һаман аумай тора... Һәммәһе булды был репертуарҙа, һәммәһе. Ярай әле таң әтәстәре ҡысҡырҙы...

* * *

Ошо төндән һуң өй эйәләре күрешмәне. Дөрөҫөрәге, күрешә алманы. Ҡыҫыҡ булһа ла, һәр береһе үҙ биләмәһе буйлап йүгерҙе: береһе - кәртәнең был яғында, икенсеһе башҡа яғында. Шулай ҙа, тороп ҡалған ярыҡтар тәңгәлендә генә, һүҙ ҡушҡылап, сәләмләшеп алдылар - ни тиһәң дә, күршеләр бит. Күрше хаҡы бар, ғүмерҙәре буйы ата-бабалары сәләмләшеп, бергә-бергә хужаларына, уларҙың малдарына именлек теләне...

* * *

Тарҡылашыуҙар, эстән бер-береһен өнәмәүҙәр, хатта күрә алмауҙар (хәйер, улай тиһәң, асыҡтан-асыҡ талаш, йәмһеҙләшеүҙәр булыр ине. Беҙ уны образлы итеп, "күренмәҫ ҡара бесәйҙәрҙең күңелдәрен тырнауҙары" тип атайыҡ) күпмегә һуҙылыр ине, белмәйем. Бәлки, бер йылға, бәлки, күберәктер, бәлки... Уныһы мөһим түгел. Бына ошо "күңел тырнашыуҙары" күпмегә һуҙылыр ине икән, әгәр... Әгәр ике өйҙөң береһендә ун дүрт йәшлек малай, икенсеһендә ун өс йәшлек ҡыҙ үҫеп килмәһә...

...Күҙ ҡабаҡтары гер эленгәндәй ауыр булһа ла, йома алмай, булмышына йоҡо баҙары ҡапҡаһын асмай яфаланып ятҡан Нәжметдиндең ҡолағына ишек шығырлағандай булып ишетелде. Малай еңелсә йомошо менән сыҡҡандыр, тип уйланы ул. Көтөп ятты. Кире инеүсе булманы. Тәүҙә һул аяғын дивандан төшөрөргә уйлап, һуңынан уңына баҫып, үҙе ишеккә табан атланы. Эске яҡлап килә эленмәгән...

... Көндөң файҙаға үтеүенә ҡыуанып, ҡатыны ҡосағында бесәй балаһылай ирегән Мотаһар ниңәлер тертләп китте. Бәй, ишек асылып-ябылды түгелме?! Унын ҡулдары кеҫәүғас һәрмәне...

"Ҡытай стенаһы"ның ике яғынан ике ир - кеҫәүғас тотҡан Мотаһар, балта эләктергән Нәжметдин, һаҡ ҡына баҫып, һарай яғына табан атланы. Ике яҡтан ике муйын һуҙылды. Ә унда-а... Араға һалынған шиферҙың икеһе алынған да, аҫҡы кәртәһенә парлашып ултырып, йәш йөрәктәр тәүге мөхәббәт диңгеҙендә елкән кирә. Уларға Ҡош юлының меңдәрсә йондоҙо күҙ ҡыҫа, айҙағы Зөһрә ҡыҙ фатихаһын бирә. Тағы ла... Тағы ла ике өйҙөң күҙгә күренмәҫ изге эйәләре, йәштәргә бәхет теләп, һоҡланып баҡҡан.

**(Аҙағы. Башы 31-32-се һандарҙа).**

*БАЛАҢА УҠЫ!*

# ҠЫЙЫУ ҺӘМ БАТЫР ҠУЯН



Бик күп тауҙар артылып, үҙән-туғайҙар үтеп бер аҙ барғас, йәп-йәшел бер урманға барып инәһең. Был урманда бейек һәм һомғол ағастар, ҡуйы һәм һутлы үләндәр, күҙҙең яуын алырҙай сағыу сәскәләр, түшәлеп ятҡан ҡайын еләгенә бай аҡландар - барыһы ла бар икән.

Тик урманда ҡанһыҙ, үҙ-үҙенән бик ҡәнәғәт, йәлләү хисенең нимә икәнен дә белмәгән ҡупырыш Арыҫлан батшалыҡ иткән. Унын холҡо бик насар булған. Нимә теләгән, шуны ҡылған, ә башҡа йәнлектәргә бер ни ҙә рөхсәт итмәгән. Арыҫлан батша саф һауала йөрөргә сыҡһа, урмандағы бар йыртҡыс-йәнлектәр, ҡоттары осоп, йән-яҡҡа ҡасып йәшенеп ҡалырға ашығалар икән. Унын әшәке холҡон барыһы ла белеп бөткәнлектән, бер кем дә унын юлында осрарға теләмәгән.

Бер ваҡыт арыҫлан, ғәҙәттәгесә, урман буйлап йөрөргә сыға. Уны күреү менән барыһы ла төрлө яҡҡа сәселеп ҡасыу сараһын күрә. Батша был хәлде күреп, үҙенән ҡурҡҡандарынан шул хәтлем ҡәнәғәт ҡала. "Мин ниндәй көслө! Бер күҙ ҡарашымдан ғына ла дер ҡалтырап төшәләр! Ҡурҡыштарынан йәһәт кенә ҡасып, тиҙерәк йәшенеү юлын эҙләйҙәр!" - тип уйлай-уйлай, ғорур ҡиәфәттә үҙ юлын дауам итә.

Арыҫлан батша, ҡараңғы төн еткәнсе, урманды арҡырыһынан буйына гиҙеп сыға. Юлында тап бул-

*✓ - Бер ҡасан да бәләкәй генә ҡуян балаһы, күҙҙәремә ҡарап, дөрөҫлөктө битемә бәреп әйтер, тип уйламаным. Мин үҙемде көслө һананым. Кем көсһөҙҙәрҙе ҡурҡытып тота, шул - көслө, тип уйланым.*



*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ҠОРОТ БАЙРАМЫ - ХӘЙБУЛЛАЛА

**Аҡъярҙың мәҙәниәт һәм ял итеү паркында шаулап-гөрләп төбәк-ара "Ҡорот-FEST" этнофестивале үтеп китте. Милли һулыш менән һуғарылған сара Хәйбулла ерендә 10-сы йыл уҙғарылды.**

Йылдың йылы кинәрәк танылыу ала барған Ҡорот байрамы үҙенең башланғысын зур булмаған Вәзәм ауылынан ала. Тап ошо ауылдың уңғандары ҡорот данын республика кимәленә сығарырға өлгәште лә инде. Хәҙер инде әлеге этнофестиваль - сәмле, йәмле конкурс менән ҡыҙыҡһыныусылар аҙ түгел. Бы-йыл Хәйбулла районына Баймаҡ, Әбйәлил, Учалы, Йылайыр, Белорет райондары, Сибай һәм Орск ҡалалары оҫтабикәләр лә килгәйне һәм, тәбиғи, һәр төбәктең милли ризыҡ ҡоротто эшләү технологияһы, төрҙәре менән танышыу мөмкинлеге лә булды. Шуны ла әйтергә кәрәк: ҡорот Хәйбулланың бренды һанала. Был юлы ла улар брендты дайыҡлы яҡланы, һынатманы - райондың 14 ауыл биләмәһе күргәҙмәгә үҙенең продукцияһын алып килеп, ошо үҙенсәлекле муллыҡты, байлыҡты күрһәтеүгә өлгәште.

Этнофестивалдең маҡсаты изге - матур йолаларыбыҙҙы тергеҙеү менән бер рәттән, ул аш-һыу туризмын үҫтереүгә лә киң юл аса. Орск ҡалаһы ҡаҙаҡтарының милли-мәҙәни автономияһы вәкиле Сәүлиә ханым, мәҫәлән, Хәйбулла ерендә үткәрелгән Ҡорот байрамы менән ҡыҙыҡһыныуы, тәжрибә өйрәнергә килеүе тураһында әйтте

"Хәйбулла ҡорото" фестивалендә төрлө тематик майҙандар эшләне, быны асығыраҡ күҙ алдына килтерер өсөн ҡай берҙәрен һанап тә китәйек. "Ағы барҙың - туғы бар" тип аталған бай йөкмәткеле театр тамашаһы бында килеүселәргә байрам кәйефе бүләк итте. Башҡорт ҡоротоноң бихисап төрҙәре менән танышыу айырыуса зур йәнлелек тыуҙырҙы. Күргәҙмә тирмәләрҙән халыҡ ағымы өҙөлмәне. "Аш ҡорот - Баш ҡорот", "Ыҫланған ҡорот", "Сәй ҡороto", "Кипкән ҡорот" номинациялары буйынса еңеүселәр билдәләнде. Хәйбулла районының хакимиәте башлығы Рөстәм Шәрипов: "Райондың брендтары күп, әммә улар араһында ҡорот айырым урын биләп тора. Уның шифаһы, дауаһы бик зур. Ҡорот борон-борондан беҙгә күсеп килгән аманат, инде замансалаштырып, төрлөсә әҙерләйҙәр, хәҙер уның йөҙҙән күберәк төрө бар, ҡорот халҡыбыҙҙың төп ризыҡтарының береһе булып ҡала", - тине.

Орск ҡалаһы оҫтабикәләренең береһе Фәрзәнә Юланова республиканан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙ өсөн бындай сараларҙың зур терәк икәнен әйтте. Шулай уҡ Ырымбур өлкәһенән килгән Флүрә Ҡоносбаева хәтирәләре менән уртаҡлашты: "Хәйбуллалар Гай ҡалаһында һабантуйға килделәр, эй, матур сығыштар яһанылар, һаман да һағынып иҫкә алабыҙ. Улар рухты һаҡлау буйынса изге эштәр алып бара. Беҙҙә лә Ағинәйҙәр клубы эшләй, сәнғәтебеҙҙе үҫтерергә тырышабыҙ. Бөгөн дә йырсы-бейеүселәребеҙҙе алып килдек", - тине.




Аҡъяр тыуған яҡты өйрәнеү музейының өс бүлектән торған "Шифалы милли ризыҡ - ҡорот" тигән күргәҙмәһе иғтибарҙы йәлеп итте: "Башҡорттоң боронғо ризығы", "Хәйбулланың иң шәп ҡорот ҡайнатыусылары", "Рәсәйҙәге иң зур ҡорото - Хәйбулланыҡы". Унда оҙайлы тарихҡа эйә шифалы, файҙалы башҡорт ҡоротоноң Хәйбулла ерендәге тарихы ентекле бәйән ителә.

Этнофестивалдә, һәр йылдағыса, ҡорот һатыуға ла ҡуйылды, Махсус хәрби операциялағы егеттәргә тип әҙерләп киптерелгән ҡорот ирекмәндәргә тапшырылды. Белорет районы Инйәр ауылынан килгән Азалия Мөсәлимова: "Беҙ был конкурсҡа беренсе тапҡыр килдек. Үҙебеҙ менән алып килгән ҡорот ризыҡтарын бик яратып һатып алдылар. Ыҫланған ҡоротобоҙ күҙ асып йомған алара таралып бөттө лә ҡуйҙы", - тине.

Ҡорот байрамында Әбеш ауыл биләмәһе (клуб, ауыл хакимиәте, китапхана хеҙмәткәрҙәренән һәм ошо биләмәгә ҡараған ауылдарҙың оҫтабикәләре) командаһы төп призды яуланы. Гран-при улар ҡулында.

"Хәйбулла ҡорото - Ҡорот-FEST" - матур йолалар дауам итә, үҫешә, нығына ғына бара, тигән фекергә ҡеүәт. Башҡорттоң туҡлыҡлы, шифалы был тәғәме беҙҙең өҫтәлдәрҙән төшкәне юҡ. Ҡорот халҡыбыҙҙың меңәр йыллыҡ тарихы менән айырылғыһыҙ. Эйе, ашъяулыҡта ниндәй генә ризыҡ тормаһын, беҙ ҡороттоң ҡәҙерен беләбеҙ, һәм шулай булыр ҙа.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**




---

ған һәр береһенә үҙенең ҡәнәғәтһеҙлеген күрһәтә. Мыҫҡыллы һүҙҙәр әйтеп рәнйетә, шелтәләп күнелдәрен ҡыра, асыуына сыҙамай, ярһып ырылдай. Шулай китеп барғанында, юлына ҡапыл төлкө килеп сыға.

- Һин нисек минең алдымдан йүгереп үтергә баҙнат иттең? - тип, Арыҫлан үткер аҙау тештәрен ыржайтып үкереп ебәрә.

Урманда ял итеп йөрөгән Арыҫланды һуң ғына күреп ҡалған төлкө, дер ҡалтырап, артҡа сигенә:

- Зззинһар ғәфү итегеҙ мине, Ғали йәнәптәре! Мин балаларым эргәһенә ашыға инем. Улар өйҙә үҙҙәре генә ҡалды, мине көтәләр! Бик тә ашыға инем бәләкәстәремә, шуға һеҙҙе күрмәйерәк ҡалдым шул...

- Нимә мығырлайһың унда? Кит юлымдан йәһәтерәк!

Ҡурҡышынан һәм рәнйетелеүҙән төлкөнөң күҙҙәренән йәштәр тәгәрәй. Шулай ҙа был урындан тиҙерәк тайыу яғын ҡарай.

Урманда йәшәү көндән-көн күңелһеҙ, ҡайғылы һәм ҡурҡыныс була башлай. Әммә, үкенескә ҡаршы, бер кем дә ҡыйыулығын йыйып, Арыҫланға йәмһеҙ ҡыланыуы тураһында әйтергә батырсылыҡ итмәй.

Урмандағы йәнлектәр араһында бер бәләкәй генә ҡуян балаһы була. Ул бергә йыйылырға ла, батшаның ҡыланыштары менән риза түгеллектәрен үҙенә әйтергә өндәй. Әммә урманда көн итеүселәр был тәҡдимде кире ҡағалар, сөнки усал һәм ҡурҡыныс батшанан ҡурҡыу көслөрәк була. Әммә бер көндө бәләкәй ҡуян балаһы яңғыҙы сыға Арыҫлан ҡаршыһына. Ғәҙәттәгесә, батша ул көндө урман буйлап ашыҡмай ғына үҙенең биләмәләрен ҡыҙыра. Һәр ваҡыттағыса, бар йәнлектәр ҡурҡыштарынан йәнйәҡҡа һирпелеп ҡаса. Тик бәләкәй ҡуян балаһы ғына, Арыҫланға иғтибар ҙа итмәй, аҡландағы йәшел һутлы үләнде йолҡоп ашауын дауам итә. Уға бигерәк тә хуш еҫле, һутлы клевер сәскәләре оҡшай, уларҙы һабаҡтарынан өҙөп алып, ләззәтләнеп көйшәй. Был күренешкә Арыҫлан хайран ҡала, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай. Ишетелмәҫлек хәл бит! Асыуынан тыны бөтөп, саҡ тонсоҡмай:

- Эй, ҡуян! Кил әле бында! - тип ырылдай.

Ҡуян балаһы ныҡ ҡурҡҡанын белдермәҫкә тырышып, яй ғына арыҫланға яҡынлаша:

- Тыңлайым, батшам. Мине саҡырҙығыҙмы?

- Әйт әле! Нинә мине күреү менән ҡурҡып ҡасманың? Һин нимә? Ҡурҡмайһыңмы?

- Миңә нимәнән ҡурҡырға? Үлән ашап йөрөп, һеҙҙе күрмәнем дә хатта. Һеҙҙән ҡурҡҡандай насар эш эшләнемме әллә? Ғәйепләләр генә ҡурҡа бит, - тип яуаплай ҡуян балаһы.

Бәләкәй генә ҡуян балаһының ҡыйыу яуабын ишеткән Арыҫлан тағы ла нығыраҡ нәфрәтләнә. Шулай ҙа был әңгәмә уға ҡыҙыҡ тойола һәм үҙенең бар асыуын баҫып, былай тип һорай:

- Улай булғас, әйт әле, ни өсөн мине күреү менән барыһы ла ҡасыу яғын ҡарай? Тимәк, улар ғәйеплеме?

- Юҡ, батшам! Улар ғәйепле түгел! Әгәр бында ғәйепләләр бар икән - был һеҙ үҙегеҙ инде! Урман әһелдәрен яҡлау һәм ҡурсалау урынына, киреһен эшләйһегеҙ. Шунан нисек улар һеҙҙе яратһындар ҙа, хөрмәт итһендәр! Тирә-яҡты ҡарағыҙ әле, ҡәҙерле батшам! Йәнлектәр араһында бер генә булһа ла дуҫығыҙ бармы, исмаһам? Барыһы ла һеҙҙән ҡурҡалар, һеҙҙән тайшаналар. Һеҙ үҙегеҙҙең нәфрәтегеҙ менән генә тороп ҡалдығыҙ. Нәфрәтегеҙ һеҙҙе еңде! Үҙенең нәфрәтен еңә алмаған көсһөҙ батша нисек итеп зур урман һәм уның әһелдәре менән идара итә алһын инде!..

Батша өндәшмәй тыңлай. Ул уйға ҡала. Ҡапыл уның күҙҙәре йәш менән тула һәм илап ебәрә. Хәҙер ул элекке һымаҡ дәһшәтле һәм усал күренмәй:

- Бер ҡасан да бәләкәй генә ҡуян балаһы, күҙҙәремә ҡарап, дөрөҫлөктө битемә бәреп әйтер, тип уйламаным. Мин үҙемде көслө һананым. Кем көсһөҙҙәрҙе ҡурҡытып тота, шул - көслө, тип уйланым. Ысын көс - мәрхәмәтле йөрәктә икәнен белмәнем...

Ошо ваҡиғанан алып Арыҫлан урмандың лайыҡлы батшаһы булырға вәғәҙә бирә.

Был хәлдең аҙағы ни менән бөтөрөн ҡыҙыҡһынып күҙәтеүсе йәнлектәр, йырҡыстар, ҡош-ҡорттар, бөжәктәр Арыҫлан китеү менән ҡасып-боҫоп һәм йәшеренеп торған ерҙәренән бер-бер артлы сыға башлайҙар. Ҡыйыу ҡуянды ҡосаҡлайҙар, рәхмәт әйтәләр һәм маҡтайҙар. Ағас ботаҡтарында ултырған ҡоштар һайрарға, тейендәр ҡоралайҙар менән кемуҙарҙан ҡыуышып уйнарға, айыу балалары тәкмәсләп көрәшергә тотона. Барыһы ла шатлана, урман байрам төҫөн ала.

Шулай итеп, бәләкәй ҡуян балаһы усал Арыҫлан батшаны еңә. Әгәр ул ҡурҡыуын баҫып, ысынбарлыҡты әйтә алмаһа, Арыҫлан үҙенең нәфрәтен еңә алмаҫ ине. Урман тормошо нисек күңелһеҙ, шомло ҡараңғылыҡта булған, шулай ҡалыр ине.

Шул көндән алып ҡуян хөрмәткә эйә була һәм барыһының да яратҡан дуҫына әйләнә. Ә инде Арыҫлан рәхимле һәм мәрхәмәтле батша булып китә.

Бер ваҡыт бик алыҫ яҡтарҙан хат ташыусы күгәрсен осоп килә. Ул Арыҫлан батшаға бер ҡағыҙ тапшыра. Беләһеңме, унда нимә яҙылғанын?

"Башҡаларҙы көс менән еңә алған көслө түгел, ә кем үҙенең нәфрәтен, асыуын еңә ала - шул көслө".

Энгин Нигарҙың "Әкиәттәрҙә әҙәп күркәмлеге" китабынан.

**Энгин НИГАР.**
**Төрөксәнән**
**Мөслимә АСҠАРОВА**
**тәржемә итте.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘШЕЛСӘ АША ЛА...

■ Ҡыҙғанысҡа күрә, барыбыҙ ҙа сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыуыбыҙ менән маҡтана алмайбыҙ. Шулай ҙа аҙнаның биш көнө дауамында көнөнә бер тапҡыр ғына булһа ла йәшелсә ашайһығыҙ икән, һеҙ үҙегеҙ менән ғорурлана алаһығыҙ. Был осраҡта организм шлактарҙан таҙара, тип белдерә Көньяҡ Корея ғалимдары. Сеулдағы Милли университетта үткәрелгән тикшеренеү һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, биш көнлөк йәшелсә диетаһынан һуң организмда зарарлы химик матдәләр күләме түбәнәйә. Йәшелсә ашау ярҙамында фталат һәм антибиотик матдәләрҙең күләмен дә түбәнәйтергә мөмкин.

■ Психологтар фекеренсә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 85 проценты башҡаларҙың тормошонда булған хәлде ишетеүҙән ҙур ҡәнәғәтлек ала, ә һәр унынсы гүзәл зат был серҙе башҡаларға ла һөйләй. Һуңғы яңылыҡтарҙы тикшереп алыу кешегә үҙенең тормошон тулыландырырға мөмкинлек бирә, имеш. Доктор Колин Гилл иҫәпләүенсә, гәйбәт "сәйнәү" серотонин кеүек гормондар бүленеп сығыуына булышлыҡ итә, был гормондар стресс һәм хәүеф күләмен кәметә. Тимәк, ғәйбәт һөйләү - кешегә үҙен бәхетлерәк тойорға ярҙам итә. Гарвард университеты ғалимдары иҫәпләүенсә, ғәйбәт башҡа кешеләрҙең холҡо тураһында мәғлүмәт тупларға булышлыҡ итә, эволюция күҙлегенән сығып ҡарағанда, был үтә мөһим. Йәғни, кеше башҡалар өлгөһөндә дөрөҫ йәшәргә өйрәнә.

■ Тикшереүселәр мәғлүмәттәренә ярашлы, мәктәп йәшендәге балаларҙың яҡынса 11,5 проценты көнөнә өс сәғәт тирәһе ваҡытын социаль селтәрҙә аралашып үткәрә. Ғалимдар туплаған статистик мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, был үсмерҙәр насар ғәҙәттәргә тиҙерәк бирелә. Улар араһында стресс, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар, суицид осраҡтары йышыраҡ осрай. Ғәҙәттә, улар насарыраҡ өлгәшә һәм шуға ла ата-әсәләре менән конфликтҡа инә. Бынан тыш, был үсмерҙәрҙең 62 проценты тәмәке тарта һәм 79 проценты алкоголле эсемлек ҡуллана. Белгестәр әйтеүенсә, социаль селтәрҙәрҙә әүҙем аралашыусы үсмерҙәр иртә енси тормош башлай һәм улар араһында наркомандар күберәк була.

■ Ғалимдар йөҙҙәрендә миңдәре булған кешеләр ҡартлыҡҡа бирешмәй, тип белдерә. Һуңғы мәғлүмәттәргә ярашлы, тәндәрендә 100-ҙән ашыу миңе булған ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең һөйәктәре ныҡыраҡ була, тимәк, улар остеопороз сиренә бирешмәй. Бынан тыш, бындай кешеләрҙең йыйырсыҡтары аҙыраҡ була һәм шуға ла улар үҙ йәшенән уртаса 7 йәшкә йәшерәк күренә. Әлбиттә, миңле кешеләргә тире яман шеше лә янай, шуға ла уларға табиптар ҡояшта оҙаҡ ҡыҙынырға кәңәш итмәй. Әммә ҡайһы бер ғалимдар миңдәрҙең ыңғай яҡтары күберәк тип иҫәпләй. Ғалимдар хәҙер миңдәрҙең йөрәк һәм күҙҙәр сәләмәтлегенә йоғонтоһон тикшерә.

■ Яҡын һәм тоғро дуҫтары күп булған кешенең ғүмере оҙон була. Был факты ғалимдар билдәләгән. Тикшеренеү барышында асыҡланыуынса, кеше ни тиклем күберәк аралаша, шул тиклем оҙағыраҡ йәшәй, имеш. Белгестәр әле был феноменды фәнни яҡтан нигеҙләргә ашыҡмай. Шулай ҙа профессор Берт Учино белдереүенсә, социаль әүҙемлек күп яңы эмоциональ тойғолар кисерергә мөмкинлек бирә. Үҙ сиратында, тоғро дуҫтар һәр саҡ ярҙам итергә әҙер, тормош йөгөн дә улар менән күтәреүе еңелерәк.

ЗАМАНСА...



# АУЫЛЫМА ҠАЙТЫУ...

## дөрөҫ ҡарар булды

**Әбйәлил районы Амангилде ауылы егете, фермер хужалығы етәксеһе Ризуан Тимербулат улы РӘХМӘТОВ төбәктә үҙенең ғәҙәти булмаған акцияһы менән киң танылыу алды, ә акция үҙе ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Акцияның үҙенсәлеге шунда: теләге булған һәр кем махсус иҫәпкә күпме мөмкинлеге бар, шул тиклем аҡса күсерә, ә фермер, үҙ сиратында, күскән аҡса иҫәбенә Магнитогорск ҡалаһы баҙарында һөт продукцияһын оло йәштәгеләргә бушлай тарата. Был проект өлкән быуынға ярҙам итеүҙән тыш, фермерлыҡтың заманса, инновацион һәм социаль йүнәлешле бизнес булыу мөмкинлеген дә асыҡ күрһәтә. Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - фермер Ризуан РӘХМӘТОВ.**

- Фермерлыҡ эше менән танышыуым бала саҡтан уҡ башланды. Атайым ауыл хужалығы эшҡыуарлығында күптән эшләй һәм минең бала сағымда йыш ҡына уның янында булдым, уға ярҙамлаштым. Дөрөҫөн әйткәндә, ул саҡта мин башҡа балаларҙың урамда бер хәстәрһеҙ уйнап йөрөүенән бер аҙ көнләшә инем, ләкин тап ошондай бала сағым, эштең асылын күреп-аңлап, бөтә нескәлектәренә төшөнөп үсеүем бөгөнгө уңышымдың нигеҙҙәренең береһелер, тип уйлайым.

Күпселек йәштәр ҙур ҡалаға ынтыла бит инде, мин дә Өфөгә киттем. Унда эшләп йөрөгәндә атайым минә ғаилә эшен дауам итергә, фермерлыҡты үҙ ҡулыма алырға тәҡдим итте. Ауылға ҡайтып, эшҡыуарлыҡҡа ныҡлап тотоноу ҡарары тормошомдоң бороло шло мәле булды. Әлеге мәлдә фермерлыҡ эшен уңышлы ғына алып барам, тип иҫәпләйем. Әлбиттә, эшмәкәрлегемдә ныҡлы терәгем - ул атайым Тимербулат Нәби улы. Уның ҙур көс һалып, оҙаҡ йылдар дауамында ныҡышмалы төҙөгән эшен дауам итеүем менән ғорурланам. Уның тәжрибәһе, кәңәштәре, аҡылы эштең ныҡлы булыуының нигеҙе булып тора.

Бөгөн хужалығыбыҙҙың төп йүнәлеше - һөтсөлөк. Яҡын киләсәктә ит йүнәлешен үҫтереүҙе планлаштырабыҙ. Беҙҙең продукция Магнитогорск ҡалаһында, Асҡарҙа һәм Яҡтыкүл ҡасабаһындағы магазиндарҙа һатыла, йәрминкә һәм баҙар нөктәләрендә лә ҙур һорау менән файҙалана.

Магнитогорск ҡалаһына шәхсән үҙем йөрөп һатам. Совет урамында урынлашҡан баҙарҙа үҙебеҙҙең һатыу нөктәһе бар, иртәнге сәғәт 7-се ятыула мин унда булам һәм 11-се яртыларға алып килгән бөтә продукцияны ла - 400 литр һөттө, шулай уҡ эремсек, ҡаймаҡты - һатып бөтәм. Ғөмүмән, һатыу менән проблемалар булмауы ҡыуаныслы - кеше продукциябыҙҙың сифатын баһалай.

Әйтергә кәрәк, сифатҡа беҙ ныҡ иғтибар итәбеҙ. Тауарҙы билдәле итеү йылдарға һуҙылырға мөмкин, ә сифатҡа иғтибар итмәү арҡаһында бөтә яуланған үрҙәрҙе юғалтыуға бер уйланылмаған аҙым да етә. Һатыуға сығарыу алдынан мотлаҡ рәүештә һөт һәм һөт аҙыҡтары лаборатор тикшереү үтә. Шулай уҡ фермала, етештереү цехында таҙалыҡҡа ҙур иғтибар бүләбеҙ. Продукциябыҙҙың таҙа, сифатлы, тәмле булыуын тәьмин итеү алдыбыҙҙа торған төп бурыстарҙың береһе.

Элек атайым һөттө арзан хаҡҡа заводҡа тапшыра торғайны, шуға күрә был юлдан ситләшеп, продукциябыҙҙы туранан-тура һатыуға күстек. Был беҙҙең килемде күпкә арттырҙы. Эшләп тапҡан аҡсаны хужалыҡты үҫтереүгә ҡайтанан инвестициялайбыҙ: һыйырҙар һанын арттырабыҙ, заманса техника һатып алабыҙ, сөсеү майҙандарын киңәйтәбеҙ. Дәүләт тарафынан бүленгән субсидиялар ҙа был йәһәттән ҙур ярҙам булып тора.

Планда - һөт етештереүҙе арттырыу, ит продукцияһын етештерә башлау. Бөгөнгө көндә уңышлы фермерлыҡ - ул традицион ысулдарҙы инновацион ҡараштар менән берләштереп эш итеү, яңы юлдар эҙләү, дөрөҫ, айыҡ һәм намыҫлы ҡараш талап иткән өлкә. Тап ошондай аҙымдар һәм ҡараштар фермер хужалығын уңышлы һәм табышлы итеүҙән тыш, ауылды үҫтереүгә лә мөмкинлек аса. Үҙ ҡулдарың менән нимәнелер эшләү, эшеңдең реаль һөҙөмтәләрен күреү һәм кешеләргә файҙа килтереү эшмәкәрлектән йәм табырға мөмкинлек, тағы ла ҙурыраҡ уңыштарға ынтылырға көс бирә.

Хужалыҡтын үҫешен күреү, атайым кәңәшенә ҡолаҡ һалып, тыуған ауылыма ҡайтыуымдың дөрөҫ аҙым булыуын асыҡ күрһәтә. Минең урыным бында. Нәҡ ошонда мин үҙемдең хыялдарымды һәм ниәттәремде тормошҡа ашырыуҙан тыш, ауылымдың һәм шул иҫәптән тотош төбәктең ауыл хужалығы үҫешен үҫтереүгә үҙ өлөшөмдө индерә алам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Социаль проект авторы шулай уҡ ауыл советы, район масштабында уҙған төрлө сараларҙа ла әүҙем бағыусы булып сығыш яһай. Ризуан Рәхмәтовтың эшмәкәрлеге ауыл ерлегендә лә эшҡыуарлыҡта яңыса ҡараш булыуын һәм йәмғиәткә ярҙам итеү мөмкинлегенең барлығын күрһәтә, ә эште дөрөҫ ойоштороу һәм перспективалы алымдарҙы ҡулланыу уңыштың бер нигеҙе икәнлеген иҫбатлай.**

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ИРЕКМӘНДӘР ҘӘ...

## яугирҙар менән бер сафта



**Илебеҙ еңел булмаған осор кисерә. Һәр осорҙоң үҙ батырҙары. Махсус хәрби операция башланыу менән ил мәнфәғәтен, Рәсәйҙең яңы төбәктәрендә йәшәүселәрҙе яҡлап сафҡа баҫҡан яугирҙар бөгөнгө көн геройҙары. Шулай уҡ алғы һыҙыҡтағы хәрбиҙәргә ҙур ярҙам күрһәтеүсе ирекмәндәрҙе лә һис шикһеҙ бөгөнгө дәүер геройҙары рәтенә индерергә мөмкин.**

Башҡортостан ирекмәндәре МХО башланған тәүге көндәрҙә уҡ берләште һәм әлеге мәлдә лә әүҙем эшмәкәрлек алып бара. Бөгөн төбәктә 150-нән ашыу ирекмәндәр цехында 10 меңдән ашыу кеше эшләй. Улар аҡса йыйып, алғы һыҙыҡтағы яугирҙарға фронтта кәрәкле әйберҙәр һатып алып ебәрә, маскировкалау селтәрҙәре үрә, шәмдәр етештерә, гуманитар ярҙамдан өҙмәй һәм башҡа бик күп эштәр башҡара. Шуға күрә төбәк ирекмәндәренең һөҙөмтәле эшмәкәрлеге Махсус хәрби операцияға ярҙам итеүҙең иң шәп өлгөһө булып танылыуына аптырарға түгел. Ысынлап та, төрлө өлкәлә эшләп йөрөүселәр, хаҡлы ялдағылар, уҡыусы балалар һәм студенттар берҙәм, әүҙем булып тәүге көндәрҙән үк яҡташтарына ярҙам итә. Июлдә Мәскәүҙә үткән "Бөтәһе лә еңеү өсөн" форумында ла Башҡортостан ирекмәндәренең эшмәкәрлеге юғары баһаланды. ***РФ Президенты хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Сергей Кириенко ирекмәндәргә наградалар тапшырҙы. "Был наградалар республикала МХО-ға ярҙам итеүсе ирекмәнлек ойошмалары эшенең юғары кимәлдә ойошторолоуы хаҡында һөйләй", - тип белдерҙе Башҡортостан Республикаһындағы Халыҡ фронты етәксеһе Виталий Брыкин.***

Башҡортостан ирекмәндәре фронт менән бәйләнеште һөҙөмтәле ойоштора алған: яугирҙар туранан-тура үҙҙәренә кәрәкле әйберҙәр тураһында хәбәр итә, ә ирекмәндәр ҙур ойошҡанлыҡ күрһәтеп, уны тиҙ арала фронтҡа алып барып еткерә.

Ирекмәнлектең мөһимлеген төбәк етәксеһе лә күп тапҡырҙар һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм был эштә ҡатнашҡан барлыҡ ирекмәндәргә рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. Тик бергәләп кенә беҙ еңеүгә өлгәшәсәкбеҙ, тип белдерҙе республика Башлыҡы Радий Хәбиров.

Яҡташтарының фиҙакәр эшен яугирҙар юғары баһалай. Мәҫәлән, Башҡортостан егете, "Кая" позывнойлы яугир москит селтәрҙәренең фронтта ни тиклем мөһим һәм кәрәкле булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. "Бөгөнгө заман һуғыш шарттарында, ғәскәрҙәр өҫтөндә пилотһыҙ аппараттар даими өйөрөлгәндә, сифатлы маскировка селтәрҙәре дошмандан

***✓ Урманда хатта бер ризыҡһыҙ бутҡа ла бешерергә мөмкин. Бының өсөн йәш ҡайындың туҙ аҫтындағы ҡабығын сей килеш тә ҡулланырға була, әммә уны ҡайнар һыуға һалғанда, ул бүртә башлай һәм бутҡаға әйләнә.***



ТЕРЕКЛЕК МӘКТӘБЕ

# УРМАНДАРҒА БАРҺАҢ,

## ризыҡһыҙ-ниһеҙ ҡалһаң...



**Баҡтиһәң, урманда ла ҡул аҫтындағы үҫемлектәрҙән икмәк бешереп була икән! Әлбиттә, бының өсөн билдәле шарттар булыуы мөһим.**

• Мәҫәлән, юлығыҙҙа һыу сығанағы һәм унда үҫеүсе томбойоҡтар осратһағыҙ, 100 процентҡа икмәкле буласаҡһығыҙ. Томбойоҡтарҙың тамырҙары 50 процентҡа - крахмалдан, 20 процентҡа - шәкәрҙән, 8 процентҡа аҡһымдан тора. Уны ҡаҙып алып, киптереп һәм он итеп онтап, усаҡта икмәк бешерергә мөмкин. Шундай уҡ ысул менән ҡамыш тамырҙарынан да икмәк бешерәләр. Ә инде ҡамыш тамырҙары киҫәктәрен бешергәндә, унан бына тигән кофе эсемлеге эшләргә була.

• Таулы, ташлы, урманлы, һаҙлы урындан йөрөү - аяҡ табандары өсөн ҙур физик көсөргәнеш. Носкиҙарҙа бер һыр булһынмы йәки аяҡ кейеме еүешләнһенме - аяҡҡа һыу тулыуын, өйкәлеүен көт тә тор. Был саҡта инде тиҙлек ныҡ кәмей. Шуға күрә походта йә урманда булғанда мөмкин тиклем аяҡтарҙы өйкәлеүҙән һаҡларға кәрәк. Әлбиттә, ҡоро аяҡ кейеме, ҡоро носки - сәләмәтлек нигеҙе, әммә урманда яңғыҙ ҡалһағыҙ, нимә эшләргә? Әгәр запас аяҡ кейемегеҙ һәм ҡоро носкийығыҙ булһа, тиҙ арала алмаштырып, еүешләнгәндәрен рюкзагығыҙға аҫып алығыҙ. Әгәр ундай мөмкинлегегеҙ булмаһа, һыу үткәрмәгән нимә булһа ла табығыҙ (клеенка, пакет, тент кеүеге һ.б.) һәм унан носки эшләгеҙ. Был ысул аяҡтарығыҙҙы еүешләнеүҙән һаҡлар.

Шулай ҙа, аяғығыҙға һыу тулһа, нимә эшләргә? Кисен һыу тулған урынды тишегеҙ (төн дауамында улар кибә), эстәге һыуҙы һығып сығарығыҙ. Тирене һыҙырып алмағыҙ! Һыу булһа, һыуыҡ һыу менән йыуығыҙ. Үҙегеҙ менән синтомицин майы булһа, һөртөгөҙ, булмаһа, шул килеш киптерегеҙ. Иртән мотлаҡ яраны пластырь менән йәбештерегеҙ йәки бинт менән бәйләгеҙ. Шулай уҡ әрме ысулын да ҡулланырға мөмкин. Әгәр спирт йәки спиртлы шыйыҡса булһа, юлға сығыр алдынан һыу тулған урынға спирт ҡоябыҙ, йомшаҡ әйбер (мамыҡ, туҡыма) һалабыҙ һәм бер нисә тапҡыр пластырь менән йәбештерәбеҙ.

• Урманда берәй ерегеҙ һыҙырылһа йәки киҫелһә ҡанды туҡтатырға ылыҫлы ағастарҙың ыҫмалаһы (живица) ярҙам итер. Ылыҫлы ағастарҙың ҡабығы аҫтында диаметры 1-1,5 сантиметр булған ҡабарынҡы урынды табып, уның аҫтынан ыҫмаланы алабыҙ һәм зыянлаған урынға һөртәбеҙ. Бынан тыш, поход шарттарында сәйгә ылыҫ энәләрен һалыу ҙа файҙалы. Ылыҫ микробтарҙы үлтерә, шунлыҡтан, һыуҙы ҡайнатып ҡына түгел, уға ылыҫ ҡушып та таҙартырға мөмкин.

Бының өсөн 3 сынаяҡ ҡайнаған һыуға 0,5 - 1 сынаяҡ ылыҫ энәһе һалырға кәрәк. Энәләрҙе бысаҡ менән турағанда тағы ла яҡшыраҡ. С витамины термоэшкәртеүҙә һөҙөмтәлелеген юғалтҡанлыҡтан, сәйҙе ҡайнатмайынса, 10-20 минут быҡтырып ултыртып ҡуйырға кәрәк. Ылыҫ энәләре урынына яҙғыһын бөрөләрен, йәшел тубырсыҡтарҙы һалырға була.

• Урманда хатта бер ризыҡһыҙ бутҡа ла бешерергә мөмкин. Бының өсөн йәш ҡайындың туҙ аҫтындағы ҡабығын сей килеш тә ҡулланырға була, әммә уны ҡайнар һыуға һалғанда, ул бүртә башлай һәм бутҡаға әйләнә. Ошо ризыҡты бутҡа урынына ашарға ярай. Ә инде ҡалғанынан йәймә бешереп, артабанғы юлығыҙға әҙер ризыҡ итеп алырға була! Сәфәрҙәрегеҙ уңышлы үтһен!

техниканы һәм яугирҙарҙы һаҡлауҙа ҙур роль уйнай. Бындай селтәрҙәр шулай уҡ төнөн беҙҙе тепловизорҙарҙан да һаҡлай. Шулай уҡ дрон һөжүм иткәндә йәки коптерҙан граната ташланғанда, улар селтәргә уралып, шартламай ҡалыуы ла ҙур ярҙам", - ти ул. "Ҡая" шулай уҡ Башҡортостан ирекмәндәре ҡулы менән эшләнгән маскировкалау селтәрҙәренең сифатлы булыуы тураһында ла һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Рәсәйҙә маскировка селтәрен етештереүсе ирекмәндәр ойошмаһының иң күләмлеһен ойоштороусы ла Башҡортостанда. Ул "Ҡалҡан Максети - Өфө" ирекмәндәр хәрәкәте етәксеһе Зилә Фәттәхова. Уның белдереүенсә, ирекмәндәр һаны көндән-көн үҫә һәм улар фронтҡа кәрәкле күп төрлө продукция етештереүҙе үҙ өҫтөнә ала. "Яугирҙар тарафынан айырыуса маскировка селтәрҙәре, һаҡлаусы плащ-пончо (защитные плащ-пончо) һәм снайперҙар өсөн махсус костюмдарға һорау ҙур. Әлбиттә, быларҙың барыһын да магазиндан йәки интернет селтәре аша һатып алырға мөмкин, ләкин беҙҙең әйберҙәр юғары сифатлы һәм яугирҙарҙың тән параметрҙарына ярашлы махсус тегеү мөмкинлеге булыуы менән айырылып тора. Яугирҙарҙан рәхмәт хаттары алыу, беҙ етештергән маскировка сараларының фронттағыларҙың ғүмерҙәрен ҡотҡарыуын ишетеү беҙгә тағы ла әүҙемерәк эшләргә көс һәм ынтылыш бирә", - тип белдерә Зилә Фәттәхова.

Маскировка селтәрҙәрен эшләү өсөн иң яҡшы материалдар һәм технологиялар ҡуллана республика ирекмәндәре. Улар белдереүенсә, яҡшы маскировкалау селтәре бер-нисә талапҡа яуап бирергә - һауланмаҫҡа, шыптырлау тауыштары сығармаҫҡа, ныҡ булырға, һуҙылмаҫҡа - тейеш. Һәм, иң мөһиме, селтәр төндә тепловизорҙан һаҡларға һәм көндөҙ тирә-яҡ менән бер төҫтә булып, позицияны йәшерергә тейеш. Зиля Фәттәхова билдәләүенсә, селтәр эшләнәсәк материалдың төҫтәрен дөрөҫ һайлау мөһим. "Фронттағылар беҙгә тирә-яҡ ландшафтың фотоһын ебәрә. Был материалдың иң ҡулай төҫөн һайлап алырға һәм шул ергә яраҡлы максималь төҫ һайлап, селтәр етештереү мөмкинлеге бирә", - ти ирекмән.

***Шуны билдәләп үтергә кәрәк: Башҡортостан ирекмәндәре 40 меңдән ашыу маскировка селтәре әҙерләгән, уларҙың дөйөм майҙаны 800 мең квадрат метр самаһы тәшкил итә.***

Шулай уҡ Башҡортостан ирекмәндәре төрлө форматтағы маскировкалау селтәре менән бер рәттән, махсус плащ-пончо етештереүҙе лә яйға һалған. Улар дошмандың һауа һәм ер өҫтө күҙәтеүҙәренән, шул иҫәптән тепловизор ҡулланылған осраҡта ла, һаҡланырға ярҙам итә. Бындай плащ-пончолар айырыуса разведчиктар һәм медицина хеҙмәткәрҙәре тарафынан ҙур һорау менән файҙаланыла. Улар йылылыҡты һаҡлаусы һәм дымды үткәрмәгән махсус материалдан тегелә. ***Өфөлә генә плащ-пончо етештереүсе 14 ирекмәндәр цехы эшләп килә, улар тарфынан 700-ҙән ашыу әйбер тегелгән.***

Волонтерҙарҙың мөһим уңышы булып "леший" һәм "кикимора" тибындағы снайперҙар өсөн костюмдар етештереүҙе яйға һалыу тора, улар үҙ үҙенсәлектәре буйынса донъяның иң яҡшы брендтары продукцияһынан ҡалышмай. Ошондай костюмдар тегеүҙе ойоштороусыларҙың береһе - Лилия Подчиварова. "Снайперҙар өсөн костюмдарға бик юғары һаҡланыу талаптары ҡуйыла, - тип аңлата ул. - Снайпер костюмы дымды үткәрмәҫкә, йылылыҡ һаҡларға, хәрәкәттәрҙе тотҡарламаҫҡа һәм яугир фигураһына ер фонына "һеңергә" (күренмәҫкә) мөмкинлек бирергә тейеш. Беҙ етештергән костюмдарҙың мөһим өҫтөнлөгө шунда: беҙ уларҙы айырым, аныҡ яугир параметрҙары буйынса, уның кейгән махсус ҡорамалдарын иҫәпкә алып эшләйбеҙ. Был ҡулланыуҙа максималь уңайлылыҡҡа өлгәшергә мөмкинлек бирә".

Яу яланындағы яугирҙар менән бер рәттән, тылда әүҙем эшмәкәрлек алып барған ирекмәндәр ҙә тиҙләтә еңеүҙе. Ошондай битараф булмағандар МХО-ның айырылғыһыҙ бер өлөшөнә әйләнде. Уларҙың йөрәгендә яҡшылыҡҡа ынтылыш һәм ышаныс йәшәй, улар ниндәйҙер маҡтау көтмәй, ә күңелдәре ҡушҡанды эшләй, дөрөҫ тип һанағанды башҡара.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Күк ҡарға, күк ҡош**

**(Сизоворонка, ракша)**



Күк ҡарға кеүектәр төркөмөнә ҡарай.

Күк ҡарға күгелйем төҫтә, арҡаһы һәм яурындары ҡарағусҡыл күк, көслө суҡышы - ҡара. Ҡанаттары ослайып тора. Йәш ҡоштарҙың башы аҡһылһоро. Осоп барғанында йыраҡтан күк төҫтә булып күренә һәм күгәрсенгә оҡшап тора. Йәйелгән саҡта ҡанатының киңлеге 63-72 см-ға етә.

Осҡан, шулай уҡ үҙенә ниндәйҙер хәүеф янай тип иҫәпләгәнендә ныҡ тауышлана, "рак", "ва-рак", "рэ-рэк" тип ҡысҡыра. Ҡош туйы мәлендә "рэрррк" тип шыҡырлай, ә йыртҡыстарҙы ҡурҡытыу өсөн "к-к-к" тип ыҫылдай.

Башҡортостандың көньяғы, көньяҡ-көнбайыш районларының дала, урманлы дала зоналарын үҙ итә. Беҙ күк ҡарғаның ояһын Бишбүләк районында, Мәнәүез-Мәскәү ауылы тирәһендә күрҙек. Йылайыр ауылы, Табын ауылы, Башҡортостан ҡурсаулығы һәм Байназар ауылы эргәһендә яңғыҙ ғына йөрөгән күк ҡарға осрағаны булды.

Апрель аҙағы - май башында осоп ҡайта. Ояһы ағас өңдәрендә, ҡая ярыҡтарында, төҙөлөш барған урында - был урындар текә яр эргәһендә булырға тейеш. Оя ҡороу өсөн уңайлы ерҙәрҙә тотош колония булып йәшәй. Ояһының төбөнә мүк, үлән-фәлән түшәй. 4-5 йомортҡа һала, йомортҡа һалып бөткәс кенә баҫырға ултыра. Инә ҡош менән ата ҡош сиратлап 18-19 көн баҫа. Бәпкәләр ояла 4 аҙна йәшәй. Ата-инәһе уларҙы ризыҡ ташып ашата.

Эре бөжәктәр, сиңерткәләр, ваҡ ҡоштар, кимереүселәр - төп ризығы, емеш-еләкте лә ашай. Ҡорбанына ерҙә һунар итә.

Августа уҡ йылы яҡҡа оса. Тәүҙә оло ҡоштар китә. Африканың көньяғында, Яңы Гвинеяла ҡышлай. Беҙгә билдәле иң оло күк ҡарғаға 9 йәш ине, әммә улар был йәштән күпкә оҙағыраҡ йәшәй.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**

**(Дауамы бар).**

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ТАҒЫ БЕР БАЙРАМ



**Өфөнөң Совет майҙанында Армия мәҙәниәте көндәре башлана. 22 августан 27-нә тиклем дауам итәсәк был сара Башҡортостан Республикаһы Башлығы инициативаһы буйынса һәм РФ Оборона министрлығы ярҙамында үҙғарыла.**

Төп ваҡиғаны асыу тантанаһы Рәсәй Федерацияһы дәүләт флагы көнөнә арналған флагтар парадынан башланасаҡ. Парадта Рәсәй Федерацияһы хәрбиҙәре, кадет корпустары, Башҡортостан Республикаһы юнармейсылары формированиелары уҡыусылары ҡатнашасаҡ.

Совет майҙанындағы киске концерттар Армия мәҙәниәте көндәренең сағыу ваҡиғаһы булмаҡсы. Республиканың баш ҡалаһында бөтәһе 30-ҙан ашыу төрлө мәҙәни ваҡиғалар, күргәҙмәләр, оҫталыҡ дәрестәре һәм эшлекле осрашыуҙар көтөлә. Армия мәҙәниәте көндәрендә А. Александров исемендәге йыр һәм бейеү ансамбле, "Ҡыҙыл йондоҙ" йыр һәм бейеү ансамбле, Үҙәк хәрби округтың йыр һәм бейеү ансамбле, Ленинград, Көньяҡ, Үҙәк хәрби округтарҙың ижади фронт бригадалары кеүек билдәле коллективтар ҡатнаша. Оҫталыҡ дәрестәрен М.Б. Греков исемендәге Хәрби рәссамдар студияһы ағзалары үткәрә.

Армия мәҙәниәте көндәрендә ҡатнашыусылар араһында беҙҙең МХО яугирҙары, шул иҫәптән Сибай филармонияһы артистары бар. Шулай уҡ сараға федераль ҡунаҡтарҙың килеүе көтөлә. Улар иҫәбендә Федерация Советының фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова, Рәсәй Оборона министрлығының мәҙәниәт департаменты директоры Артем Горный, Рәсәй Оборона министрлығы мәҙәниәт департаментының мәҙәни программалар бүлеге етәксеһе Ольга Фаллер, шулай уҡ журналист, "Звезда" телеканалы алып барыусыһы, "Еңеүселәр вариҫтары" мәҙәни-тарихи хәтерҙе һаҡлау фонды президенты Ирина Лосик бар.

Быға тиклем Армия мәҙәниәте көндәре Тула, Санкт-Петербург ҡалаларында, Тыва һәм Саха (Яҡут) республикаларында ойошторолдо. Башҡортостанда барлыҡ төбәк муниципалитеттарында һәм мәҙәниәт учреждениеларында 300-ҙән ашыу сара көтөлә. 12+

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

# ӨФӨ ТУРАҺЫНДАҒЫ ФИЛЬМ...

**Татарстандың Әлмәт ҡалаһында үткән Икенсе халыҡ-ара тамашасы һөйөүе кинофестивалендә Айнур Асҡаровтың "Йәй. Ҡала. Мөхәббәт" фильмы фестивалдең Гран-прийын һәм "Кино ваҡыты" дирекцияһының махсус призын яуланы.**

Фильмды Айрат Абушахманов, Айнур Асҡаров, Айҙар Аҡманов, Айсыуаҡ Йомағолов, Руслан Юлтаев, Виталий Дудка, Руслан Рим улы төшөргән.

Фильмды фестивалдә уның продюсеры Анастасия Асҡарова, художество етәксеһе, режиссеры Айнур Асҡаров һәм режиссер Руслан Рим улы тәҡдим итте. Тамашасылар команда менән аралашты һәм проекттың барлыҡҡа килеү тарихын һорашты. "Беҙҙе йылы ҡабул иткәне һәм ошо көндәрҙә кинофестивалдә хөкөм һөргән ысын киноатмосфераһы өсөн Әлмәт ҡалаһына команда исеменән рәхмәт белдерәм, - тине Айнур Асҡаров. - Шуны билдәләп үтергә кәрәк, тап 2016 йылда "Кино ваҡыты" Татарстан киноформумынан "Өфөнән һөйөү менән " фильмы бөтә Рәсәй прокатына сыҡты, яңы картинаны ла шундай уҡ яҙмыш көтә һәм был яҡшы традицияға әйләнер тип ышанам! Беҙ бөтә ил буйлап тамашасыға юлды дауам итәбеҙ".

"Ҡаракүҙ фильм"- төбәк һәм милли киноны хуплаған йыл һайын үткәрелеүсе тамашасылар һөйөүе фестивале. Ул үҙенсәлекле проекттарҙы берләштерә һәм үҙенең тамашасыһын табырға ярҙам итә. "МТД Медиа" репертуар планлаштырыу департаменты етәксеһе Инна Казакова билдәләүенсә, көҙгә был проекттың Татарстанда ғына түгел, бөтә Рәсәйҙә лә киң прокаты көтөлә. "Йәй. Ҡала. Мөхәббәт" фильмына Рәсәй буйынса прокат ойоштороуҙа МТД Медиа Кинопланета яғынан ярҙам күрһәтеләсәк, ә Cinemaplex.ru порталы - кинобизнес профессионалдары өсөн мәғлүмәт-аналитика һәм мәҙәни-ағартыу баҫмаһы мәғлүмәт ярҙамы күрһәтәсәк.

# ИЛНАР ХӘТМУЛЛИНҒА АРНАЛА

**Ошо көндәрҙә Махсус хәрби операцияла һәләк булған "Сибай" халыҡ бейеү ансамбле солисы, талантлы бейеүсе Илнар Хәтмуллиндың яҡты иҫтәлегенә арналған "Герой бейеүе" фильмы (12+) донъя күрҙе. Ҡыҫҡа метражлы документаль фильмдың режиссёры - Радик Килмәмәтов.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан геройҙар тураһында фильмдар төшөрөү бурысын дәүләт заказы булараҡ билдәләне. Республиканың Мәҙәниәт министрлығы белдереүенсә, "Герой бейеүе" - ошо маҡсатта төшөрөлгән тәүге фильмдарҙың береһе. Уны тормошҡа ашырыуға БР Мәҙәниәт министрлығы менән берлектә Ә. Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы ҙур көс һалған.

Белеүебеҙсә, "Сибай" халыҡ бейеү ансамбле солисы, талантлы йәш бейеүсе Илнар Хәтмуллин 2022 йылдың 26 сентябрендә мобилизацияланна, мотоуҡсылар ротаһы составында Махсус хәрби операцияла ҡатнаша. Ул 2023 йылдың 30 июнендә хәрби бурысын үтәгәндә батырҙарса һәләк була. Илнар - бейеүселәр ғаиләһендә тыуып үҫкән, бала саҡтан ошо сәнғәт төрөн үҙ иткән талантлы бала ине.

БОҘМАЙЫҠ!

# ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ ЛА...

## тарих һөйләй

**Республикабыҙ хозур тәбиғәте менән данлы: беҙҙә мәғрур тауҙар һәм ҡаялар ҙа, мул һыулы йылғалар һәм күлдәр ҙә, урмандар һәм яландар ҙа етерлек. Тик күп осраҡта ер-һыу атамаларының башҡортсаһын боҙоп әйтеү күренеше менән осрашырға тура килә. Түбәндә - шуларҙың ҡайһы берҙәре генә:**

"Айские притесы" түгел - Сыбар ҡая;
"Тещин язык" түгел - Елмәрҙәк бөгәлө;
"Банное" түгел - Мауыҙҙы йөки Яҡтыкүл;
"Чертов палец" түгел - Әбей ташы;
"Исянчик" түгел - Талҡаҫ күле;
"Малиновая гора" түгел - Еләктау;
"Синие скалы" түгел - Көлһыуғаҙыташ ҡаяһы;
"Розовые скалы" түгел - Ҡыҙылташ;
"Капова" түгел - Шүлгәнташ мәмерйәһе;
"Соленое" түгел - Мулдаҡкүл;
"Белая" түгел - Ағиҙел йылғаһы;
"Уфимка" түгел - Ҡариҙел йылғаһы;
"Урал" йылғаһы түгел - Яйыҡ йылғаһы;
"Худолаз" түгел - Төйәләҫ йылғаһы;
"Сергеевка" түгел - Һәргәй ауылы;
"Большой Шатак" түгел - Бишитәк тауы.

**Шулай итеп, ер-һыу атамалары - шул уҡ беҙҙең тарих. Унда шәхестәр исеме лә, төрлө ваҡиғалар шаңдауы ла, ата-бабаларыбыҙҙың тәбиғәтте, теге йә был күренеште һүрәтләүе, ҡабул итеү билдәһе лә. Әйҙәгеҙ, ошо тарихи хәҡиҡәткә лә битараф булмайыҡ әле. Мин яҙған был исемлеккә һеҙ тағы ниндәй ер-һыу атамаларын өҫтәр инегеҙ?**

**Земфира ИШБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕР АЛДАҺАҢ...

## ғүмергә алдаҡсы булырһың

Белмәгән сибәрҙе алғансы, белгән йәмһеҙҙе ал.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡайһы саҡта ҡатын-ҡыҙ ир кеше менән яҡынлашыуҙан ҡурҡып ҡаса, ул оҡшамаған өсөн түгел, ә үҙе уға оҡшамауҙан ҡурҡҡан өсөн.

**(Константин Мелихан).**

Артыҡ ҡайнар мөхәббәт иң аҙағында беҙҙе күңел тәңөлөүгә килтерә. Шуға ла ашҡаҙан өсөн тәмле аҙыҡ нисек зыянлы булһа, кеше өсөн ҡайнар мөхәббәт тә шулай уҡ зыянлы.

**(Публий Овидий).**

Ҡатын һәм ир ике осраҡта күңел болоҡһоуына бирелә: бер-береһен оҙаҡ күрмәгәндә һәм бер-береһе эргәһендә оҙаҡ торғанда.

**(Жан Ростан).**

Ғаилә бөтәһен дә алыштыра. Шуның өсөн өйләнер алдынан уйла: һиңә нимә мөһимерәк - бөтәһелә, әллә ғаилә генәме?

**(Фаина Раневская).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше Аҡһаҡалға килә һәм шулай тип һорау бирә:**

**- Аҡһаҡал, миңә ни эшләргә, кәңәш бир. Мин бөтөн тәнемдә тартыныу тоям. Беләм, мин үҙемдең ролдә түгелмен, мин үҙемдең ысын тойғоларымды белдерә алмайым. Минең үҙем булғым килә...**

**- Һин, ысынлап та, үҙ тойғоларыңды баҫтыраһың, - ти Аҡһаҡал. - Бәләкәй сағыңда һине иламаҫҡа һәм көслө булырға өйрәткәндәр. Шулай итеп һине тойғоларыңды баҫтырырға өйрәткәндәр. Әгәр ҙә кеше аҡыл файҙаһына үҙенең тойғоларын баҫтыра икән, тимәк, ул бары тик уйлай белеүсе машинаға әүерелә.**

**Тартыныу тойғоһо үҙеңдең уҡытыусыларыңдың һабағын яҡшы үҙләштереүең тураһында һөйләй. Уларҙы ғәйепләмә, улар һиңә изгелек эшләйбеҙ икән тип уйлағандар. Ләкин улар үҙҙәре лә аңламайынса һине көсһөҙ булырға өйрәткәндәр.**

**Ә бит бары тик көслө кеше генә йөрәгенең ташҡа әйләнеүенә ҡаршы тора ала. Көслө кеше генә үҙенең тойғоларынан йөшенмәй. Илағыһы килһә - илай, шатланғыһы килһә - шатлана, көлгөһө килһә - көлә. Һинең эске Мин тойғоларҙан тора, уларҙы тышҡа сығар һәм улар менән үҙеңсә, бер-берегеҙҙе аңлаған телдә һөйләш. Шул саҡта ғына һин үҙең булып йәшәйәсәкһең..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** **253-25-44**
**Хәбәрселәр** **252-39-99**
**Матбуғат таратыу** **252-39-99**

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 21.08.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 21.08.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 22.08.2025 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2707
Заказ - 1571